✓ *Кешелә уның уй-хыялдарын ҡуҙғытырлыҡ, үҙе хатта был турала белмәгән һәм хыялланып та ҡарамаған, әгәр уларҙы ойоштороп эшкә еккәндә тормошон тулыһынса үҙгәртә алырлыҡ көс-ҡеүәт йоҡлай.*

*Орисон Марден.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 МАРТ (БУРАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№10 (480)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ир - баш,**

ҡатын - муйын



3

**Өләсәйҙәр...**



6-7

**Яҡшы улың корҙашындай булыр...**

яҡшы килен серҙәшендәй булыр



8-9

**Диндар ирҙең ҡатыны...**



калай бәхетле!

13

14 ТВ-программа


*ҠОТЛАЙБЫҘ!*




## ЕР ЙОНДОҘО

*Йыһан киңлегендә иң яҡтыһы -*
*Ер тыуҙырған йондоҙ - ҡатын-ҡыҙ!*
*Ялҡынына күбәләктәй осоп*
*Күпме тапҡыр инде янғанбыҙ!*

*Йәшәй алмайбыҙ тик бер мәлен дә*
*Был ғүмерҙең ошо йондоҙһоҙ.*
*Балҡый ир-егеткә юлдаш булып,*
*Ҡояш булып гүзәл ҡатын-ҡыҙ!*

*Яныбыҙҙа балҡый. Йөрәгенә*
*Инәм генә тиһәң, алыҫ ул.*
*Егет өсөн, ахры, еңелерәк*
*Күк есемен үрелеп алыуы.*

*Ғаләмдәрҙең барлыҡ серҙәренә*
*Асҡыс таба ир-ат йөрәге.*
*Асылмайса ҡала уның өсөн*
*Тик ҡатын-ҡыҙ тигән сер мәңге.*

*Бейектәргә ҡарап таң ҡалһаҡ та,*
*Ҡалҡҡан саҡта төнгө ай-йондоҙ,*
*Бейеклеккә беҙҙе әйҙәп тора*
*Ер йондоҙо - гүзәл ҡатын-ҡыҙ!*

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

*АФАРИН!*

**2006 йылда Рәсәй Президенты "Йәш таланттарға дәүләт ярҙамы тураһында" указ ҡабул итте. Указға ярашлы, йыл дауамында бөтә донъя, Рәсәй һәм төбәк кимәлендәге төрлө олимпиада, конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулаған 14 йәштән 25 йәшкә тиклемге йәш таланттарға грант тапшырыла. Быйыл Башҡортостанда 135 кеше ошондай грант алыу бәхетенә өлгәште. Улар араһында Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 9-сы синыф уҡыусыһы Ләйсән Зәйнетдинова ла бар.**

# ОЛО ЕҢЕҮЕМ...

## юғарыға баҫҡыстың — тәүгеһе



- Былтыр Мәсетле районы Оло-Ыҡтамаҡ ауылында Рәсәй кимәлендә уҙғарылған "Ҡумыҙсылар һәм өзләүселәр" конкурсында 16 йәшкә тиклемге яңғыҙ башҡарыусылар араһында беренсе урын яулауым һәм Борай районында үткән "Йәйғор" конкурсында ҡустым менән икебеҙ Гран-при алыуыбыҙ ошо абруйлы грантҡа юл асҡандыр, тим, - тип һөйләй Ләйсән Зәйнетдинова. - Ҡумыҙға һөйөүем ғаиләнән, бигерәк тә атайымдан, донъяның виртоуз ҡумыҙсыһы Миңлеғәфүр Миңлеәхмәт улынан килә. Нәҡ ул миңә тәү тапҡыр ҡумыҙ тотторҙо, уйнарға өйрәтте, ошо мөғжизәле музыка ҡоралына һөйөү уятты. Һәр яңы өйрәнгән көйөмдө беренсе тыңлаусы һәм баһалаусы ла атайым. Тағы ла ҡурайҙа һәм гитарала уйнаһам да, минең өсөн иң яҡыны һәм ҡәҙерлеһе барыбер ҡумыҙ, сөнки нәҡ ошо музыка ҡоралы ярҙамында ғәжәйеп моң донъяһына юл астым. Үҙенсәлекле һәм матур яңғырашы менән күптәрҙе әсир иткән ҡумыҙ ярҙамында ат тояғы тауышын да, сал далала ел иҫеүен дә, урманда ҡоштар һайрауын да, яҙғы тамсылар тамыуын да, ыжғыр бурандар ажғырыуын да ишеттереп була. Ҡумыҙҙың сихри моңон бер тапҡыр ишеткән кеше уны бер ҡасан да онотмай. Ләкин тыңлаусыны арбар өсөн бары тик һәләт кенә етмәй, ә оҫталыҡты камиллаштырыу өсөн талапсан эшләү, даими шөғөлләнеү талап ителә. Шулай уҡ юғары оҫталыҡҡа етеү өсөн эргәндә бар ынтылыштарыңды хуплап һәм башланғыстарыңды йөпләп тороусы кешеләр кәрәк. Минең өсөн ул — ғаиләм. Улар ярҙамында мин артабан да бейек үрҙәргә күтәрелермен, тип ышанам һәм ошо еңеүемде тәүге баҫҡыс, тип ҡабул итәм.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА яҙып алды.**

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИР - БАШ,

## ҡатын - муйын

**Гәзиттең былтырғы 37-се һанында "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын" тигән мәҡәләм баҫылғас, гәзитебеҙҙең күптәнге дуҫы Рәйсә апай Ҡарабаева минең яҙғандарға ҡаршы "Тыуммаған балаларыбыҙ өсөн ирҙәрме, ҡыҙҙарыбыҙмы ғәйепле?" тип сығыш (48-се һанда) яһаны. "Әхмәр Үтәбайҙың мәҡәләһен уҡығас, оҙаҡ ваҡыт иҫемә килә алмай йөрөнөм. Милләттең бөлөү ғәйебен ҡалай анһат ҡына ҡатын-ҡыҙҙарға япһарып ҡуйған... Нишләмәк кәрәк, өйләнмәгән егеттәрҙе көтөп, ҡартайып, балаһыҙ ултырып ҡалып булмай бит инде. Шулай итеп, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа икенсе милләт егеттәренә кейәүгә сығып, милләтте бөлдөрөү юлына баҫты. Был хәл беҙҙең ир-егеттәребеҙгә оҡшаманы. Баҫмаларҙа "Үгеҙ эйәртеп ҡайталар", тип, ҡыҙҙарыбыҙҙан көлөп яҙған мәҡәләләр күбәйҙе...", тигән юлдар ҙа бар уның мәҡәләһендә.**



Миңә ҡаршы сығып, фекерҙәремде инҡар итергә тырышһа ла, оло рәхмәтемде белдерәм Рәйсә апайға. Сөнки мин был мәҡәләне яҙғанда унда күтәрелгән мәсьәлә буйынса ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың сәменә тейеүҙе маҡсат итеп ҡуйғайным һәм шул маҡсатыма өлгәштем. Рәйсә апай кеүек милләтебеҙ киләсәге өсөн битараф булмағандарҙы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ араһында күберәк күрге килә. Шуға күрә гәзиттең алдағы һандарында ла был хаҡта һөйләшеүҙең бәхәскә әүерелеп китеүен теләйем. Нимә генә тимә: хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, тиҙәр. Юҡһа, беҙҙең күп кенә уҡыусыларыбыҙ ваҡытлы матбуғатта күтәрелгән теге йәки был мәсьәләгә битараф булмаған осраҡта ла, эсендә ут янһа ла, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә. Ә бит беҙҙең күп кенә проблемаларыбыҙ ана шулай беләгүрә өндәшмәүебеҙ арҡаһында ҡатмарлана барып, һуңынан үҙебеҙҙе йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡ эсенә алып барып ташлай. Мәсьәләне уртаға һалып һөйләшеү ихтыяжы - ул һәр ваҡыт, һәр заман өсөн дә ҡулай. "Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа", тигән бит халыҡ шағиры Рәми Ғарипов та.

Тап шуның өсөн дә "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын" әйтеменә бәйле һөйләшеү темаһын дауам итеп, "Ир - баш, ҡатын - муйын" тигән әйтемде лә иҫкә төшөрҙөм. Ҡатын-ҡыҙҙар беҙгә һәр саҡ: "Баш булһағыҙ ҙа, беҙ муйын бит әле. Муйын ҡайҙа борһа, баш шул яҡҡа бара", - тип әйтергә ярата. Килешәбеҙ, һеҙҙең муйын булыуығыҙға ризабыҙ, шатбыҙ, әммә был йәһәттән бер шағирҙың (кемдеке икәнен онотҡанмын) шундай шиғыр юлдарын иҫкә төшөрөп үтке килә:

*Ир - баш, ҡатын - муйын,*
*Мәҡәл дөрөҫ булһа ла,*
*Боролорға бойороҡто*
*Муйын бит баштан ала.*

Бәй, шулай булғас, башмы-муйынмы мөһимерәк икән? Бында, физиологияны, биологияны иҫкә төшөрөп, тағы ла бик оҙаҡ бәхәсләшергә мөмкин булыр ине. Әммә мин бында уларҙың ҡайһыһы мөһимерәк икәнен билдәләүҙе маҡсат итеп ҡуймайым, әйтемдең әһәмиәтен икенсе юҫыҡта ҡарағым килә.

Бер мәл йылға яры ситендә өс ир заты табын ҡороп ял итә икән. Уларҙың береһенә - 25, икенсеһенә - 60, өсөнсөһөнә 85 йәш булған. Шулай күңелле генә ултырғандарында күрәләр: йылға уртаһындағы утрауҙа һыуһылыуҙай ҡыҙҙар һыу инеү кейемендә генә йөрөп ятмаһындармы! Шул саҡ, тәбиғи, ир заттарының күңелдәре елпенеп, йөрәктәре күкрәктәренән сығырҙай булып өлпәндәп тибешергә тотона.

- Мин хәҙер уларҙың янына йөҙөп барам да, иң матурын үҙемә ҡаратам, - тигән ярһып сисенеп үк ташлаған 25 йәшлек егет йылға яры менән утрау араһында ажғырып ағып ятҡан йылға ағымына иғтибар ҙа итмәйенсә.

- Бәлки, ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен бында ҡунаҡҡа саҡырырбыҙ, табыныбыҙ ҙа әҙер, - тигән 60 йәшлек ир-уҙаман, ажғырып ятҡан йылғаға төшөргә баҙнаты етмәйерәк.

- Ҡуй, юҡ менән булмағыҙ, ниңә улар эргәһенә барырға йә ҡунаҡҡа саҡырырға, бынан да яҡшы күренә бит, - тигән ир заттарының иң олоһо, биноклененең линзаһын һөртә-һөртә.

Был ҡыҙыҡлы һәм 85 йәшлек ҡарт өсөн бигүк ҡыҙыҡ булмаған ваҡиғанан сығып, ир-егеттәрҙең ирлек ғүмере, ҡеүәте хаҡында ла фекер йөрөтөргә, ниндәйҙер һығымта яһарға булыр ине. Әммә бында тағы ла "Ир-егеттең тормошҡа мөнәсәбәте, үҙ-үҙен нисек тойоуы, рухи халәте ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәте менән билдәләнә" тигән һығымта ла яһарға була. Беренсенән, ҡатын-ҡыҙ, ирҙең башы ни тиклем генә аҡыл менән тулы йә бүҫкә булмаһын, бер ниндәй ҙә йәш айырымлығына ҡарамай, үҙенә боролоп ҡарарға мәжбүр итә. Был осраҡта, баш, ысынлап та, муйындың ихтыяры буйынса хәрәкәт итә. Икенсенән, баш, ни тиклем генә аҡыллы һәм тәжрибәле булмаһын, үҙенең эшмәкәрлегенә йүнәлеш биреүсе муйынға һәр саҡ мохтаж. Атайым, мәҫәлән, ниндәй генә эшкә тотонмаһын, һәр саҡ иң тәүҙә әсәйем менән кәңәш ҡора торғайны. Сөнки уның әсәйемдең фекере менән раҫланмаған ғәмәле килеп сыҡмай йә ярты-лаш ҡына тормошҡа аша ине. Мин һәр ваҡыт был хәлгә аптырап ҡараным, аҙаҡтан ғына аңланым: ир - баш, ҡатын муйын икән был тормошта. Әсәйемдең фекере һәр ваҡыт дөрөҫ һәм өҫтөн сығыуының сәбәбен дә аңлайым: ул һәр ваҡыт ғаилә, беҙҙең - балаларының мәнфәғәте буйынса эш иткән һәм һәр осраҡта ла беҙгә яҡшы булһын тип теләгән.

Ә бит "Ир - баш, ҡатын - муйын" әйтеменең милли идея булырлыҡ әһәмиәте лә тап ошонда ята. Йәғни ил башы булған етәксе, ниндәй генә ҡарарҙар ҡабул итмәһен, ул иң беренсе нәүбәттә ил граждандарының, уның ячейкаһы булған ғаиләләрҙең ихтыяжын уйларға бурыслы. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәһә, ҡарарҙар халыҡҡа ҡаршы эшләй башлай. Бер уйлағанда, ир менән ҡатын араһындағы вәкәләтлекте бүлешеү хаҡында ғына һымаҡ был әйтем, ә уның төбөнә һалынған мәғәнәһе бөтөнләй икенсе нәмә хаҡында, һәр хәлдә, беҙ ябай ғына итеп аңлағандан тәрәнерәк.

Барығыҙ ҙа бер хәлгә иғтибар итәһегеҙҙәр: ҡатыны үлеп йә башҡа сәбәп менән яңғыҙ ҡалған ир, хет ожмах шарттарында йәшәһен, тиҙ генә бирешә лә ҡуя. Ҡатын-ҡыҙҙар был йәһәттән, киреһенсә: ирһеҙ ҡалған осраҡта ла бирешмәйенсә, Хаҡ Тәғәлә биргән ғүмер йомғағын аҙаҡҡаса һүтеп, сабый хөкөмөнә инеп, донъялыҡ менән тәбиғи хушлашыу мөҙҙәтенә тиклем йәшәй. Иренең йәшәү принцибын аҙаҡҡаса алып барып еткерә ҡатын-ҡыҙ. Йәшләй генә ире үлгәндән һуң, күмәк балалары менән тол ҡалып, ғүмеренең аҙағынаса башҡа иргә бармайынса йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың был әмәлен мин "муйын"дың "баш"ҡа тоғролоғо итеп күрәм. Тәбиғәт тарафынан һалынған ҡатынлыҡ хисен тойоуҙы ҡорбан итеүҙе мин башҡаса аңлай һәм аңлата алмайым. Ә бит әллә ҡасан үлгән иренә тоғролоҡ һаҡлап, балалары өсөн йәшәгән саҡта ҡатын-ҡыҙ иренең уй-хыялдарын тормошҡа ашырыуҙы маҡсат итеп ҡуя, тәбиғи, был уй-хыялдар иренең башында ярала.

Беҙҙең илдә, бигерәк тә беҙҙең халыҡта элек-электән балаларҙы әсәй кеше, асылда, ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләй. Был осраҡта ла әсәй кеше һәр ваҡыт "баш" образының ярҙамына мохтаж. Хатта атай кеше "теге тарафта" йә алыҫтағы эшендә, командировкала, һуғышта йә төрмәлә булһа ла, һулыу һайын уны иҫенә төшөрә, йә: "Атайыңа әйтәм", - тип киҫәтә, йә: "Атайың шулай ине, былай ине", - тип уға оҡшарға, тиңләшергә саҡыра, өлгө итеп ҡуя, йә: "Атайың нимә тиер әле", - тип уның һүҙенә ҡолаҡ һалырға саҡыра, йә: "Атайың белеп йә күреп ҡалһа", - тип балаһын һаҡ булырға саҡыра, йә: "Атаңа оҡшап", - тип атаһының хаталарын ҡабатламаҫҡа саҡыра.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда йәш табиптар, "Земство табибы" программаһында ҡатнашыусылар менән осрашыу үтте. Республиканың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һәм Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Фидус Ямалетдинов "Земство табибы" программаһының төп положениелары менән таныштырҙы. Республикала 2012 йылда программала 553 кеше ҡатнаша ала. Уларҙың һәр береһе федераль бюджеттан - бер миллион һум, республика бюджетынан 100 мең һум аҡса аласаҡ. Республиканың ауыл ерҙәрендә әле 1300-ҙән ашыу белгес етешмәй. Бөгөнгө көнгә 215 табип "Земство табибы" программаһында ҡатнашырға теләк белдергән.

✓ Бер нисә айҙан пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнгән "Башавтотранс" дәүләт предприятиеһының транспорт карталары ғәмәлдән сығарыласаҡ. 2012 йылдың 1 ноябренән "Башҡортостан Республикаһының социаль картаһы"н алған кешеләр генә юлда ташламалы хаҡтар менән йөрөй аласаҡ. Уларҙы сығарыуға ғаризалар бөгөндән ҡабул ителә. Бының өсөн теләге булғандарға БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының территориаль органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн 8-800-100-8180 телефонына бушлай шылтыратырға мөмкин.

✓ Өфө Эшҡыуарҙар союзының йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә март айында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса бушлай консультациялар үтәсәк. 13 мартта Рәмилә Жидкова "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ предприятиеларын һаҡлау эштәрен нисек ойошторорға" темаһына, 22 мартта хужалыҡ итеүҙең ойоштороу-хоҡуҡи формаһын һайлау һәм предприятиены теркәү тәртибе тураһында Ирек Ильясов, 27 мартта "Һалым һалыуҙың уңайлы системаһын һайлау һәм бухгалтер иҫәбен алып барыуға сығымдарҙы кәметеү" темаһына Диана Киселева үҙенең кәңәштәрен бирәсәк. Консультациялар киске сәғәт 4-тән 6-ға тиклем үткәрелә. Белешмәләр өсөн: 241-47-44.

✓ Башҡортостан делегацияһы Голландиялағы "Nation Branding & Investment Expo 2012" форумында ҡатнашасаҡ. БР Иҡтисади үҫеш министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, агросәнәғәт комплексы объекттарына барыу, потенциаль инвесторҙар, фондтар, банктар һәм дәүләттең башҡа рәсми кешеләре менән һөйләшеүҙәр үткәреү, нидерланд эшҡыуарҙары менән диалог, атап әйткәндә, "Индустрия нанотехнологиялары" конференцияһында ҡатнашыу планлаштырылған.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ШТРАФЫҢДЫ...

## ваҡытында түлә

**Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл февраль айында ғына "Штраф" операцияһы сиктәрендә Өфө ҡалаһында административ штрафтарҙы закон буйынса билдәләнгән ваҡыт эсендә түләмәү арҡаһында 450 граждан яуаплылыҡҡа тарттырылған, уларҙың 293-ө мировой судьялар ҡарары менән 15 тәүлеккә тиклем һаҡ аҫтына алынған.**

Штраф рәүешендә административ яуаплылыҡҡа тарттырылған кеше, яуаплылыҡ гәмәлгә ингән көндән алып, 30 көндән кәм булмаған ваҡыт эсендә штрафты түләргә тейеш. Административ штрафты ваҡытында түләмәүселәргә уның күләмен ике тапҡыр арттырып түләргә, йәки 15 тәүлеккә тиклем һаҡ аҫтында ултырып сығырға тура киләсәк.

Әйткәндәй, штрафты теләһә ҡайһы банкта түләү мөмкинлеге бар, әммә уны түләү генә гражданды административ яуаплылыҡтан азат итмәй әле: закон буйынса, түләү хаҡындағы квитанцияны эске эштәр органдарына алып барып ҡалдырыу мөһим. Шулай ҙа, административ штраф яҙып биргән хеҙмәткәр утыҙ көндән һуң, өс көн эсендә был ҡарарҙы суд приставтарына юллай.

# АВТОМОБИЛЬ КҮБӘЙӘ...

## экологияға хәүеф арта

**Рәсәйҙә һәр дүртенсе кешенең шәхси автомобиле бар. Мең кешегә уртаса 249 еңел автомобиль тура килә икән. Ошондай күрһәткес буйынса беҙҙең республика 46-сы урында ғына килә.**

Ғөмүмән, Волга буйы федераль округына ингән төбәктәр "тимер аттар" менән аҙ тәьмин ителгән. Автосәнәғәт үҫәге һаналған Һамар өлкәһендә лә машиналар сағыштырмаса аҙ. Башҡортостан тирәһендә автомобилдәр етештерелмәй, өҫтәүенә, сик буйында ятҡан төбәк түгелбеҙ, шуға республикалағы хәл аңлашыла, ти белгестәребеҙ. Тикшереннеү үткәреүселәр әйтеүенсә иһә, автомобилдәр менән тәьмин ителеү күрһәткесе халыҡтың йәшәү кимәлен сағылдыра. Иң күп машиналарға эйә булған төбәк - Япония сигендә ятҡан Приморский крайы. Унда сит ил автомобилдәрен арзан хаҡҡа ғына һатып алалар. Башҡортостанда әлегә Рәсәй автомобилдәре өҫтөнлөк итә. Шулай ҙа баш ҡалабыҙҙа машиналар етерлек - мең кешегә 340 автомобиль тура килә. Фаразлауҙарынса, тиҫтә йыл дауамында был һан ике тапҡырға артасаҡ.

Экологтар машиналар артыуына ҡыуанырға ашыҡмай. Улар әйтеүенсә, һауалағы бысраҡ матдәләрҙең 65 проценты - автотранспорт арҡаһында. Хәлде үҙгәртеү юлдарының береһен экологтар газдан етештерелгән яғыулыҡҡа күсеүҙә күрә.

ҺАЙЛАУҘАР



# "БЫЛ - ПУТИНДЫҢ ТҮГЕЛ,

## ә айыҡ аҡылдың еңеүе!"

**Бөтә Рәсәй буйынса уҙған берҙәм һайлау көнөнән һуң "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе етәксеһе Рөстәм Ишмөхәмәтов менән В. Путиндың һайлауға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса халыҡ штабы етәксеһе Альберт Мифтаховтың журналистар алдында һайлау һөҙөмтәләренә арналған матбуғат конференцияһында яңғыраны был һүҙҙәр. Сөнки: "Путиндың характеры спортсыларҙыҡы кеүек. Ул вәғәҙә иткәнен генә түгел, ә күберәкте эшләйәсәк. Спортта ла, сәйәсәттә лә элекке еңеүселәр килеп, яңы һөҙөмтәләр күрһәтеүе икеле. Спортсылар ҙа, сәйәсмәндәр ҙә аренанан еңеүсе булып китергә тырыша, Владимир Владимирович та сәйәси аренанан еңеүсе булып китәсәк. Әлбиттә, быным өсөн алты йыл ваҡыт аҙыраҡ, был ваҡыт теләһә ниндәй сәйәсмән өсөн дә алдына алған бурыстарҙы атҡарып сығырға етмәйәсәк. Әммә алты йыл әйләнеп ҡайтыу нөктәһен үтеү өсөн етәсәк. Халыҡ шуны аңланы, шуның өсөн тауыш бирҙе", - тине Альберт Ленар улы.**

Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһының яҡынса мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, Рәсәй Президентын һайлауҙарҙа республикала 75,28 процент тауыш йыйып, Владимир Путин лидерлыҡты биләй. КПРФ башлығы Геннадий Зюганов 14,18 процент тауыш менән икенсе урында килә. Владимир Жириновский менән Михаил Прохоров 3,64-әр процент тауыш алһа, Сергей Миронов өсөн 2,49 процент электорат тауыш биргән. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы мәғлүмәттәре буйынса ла еңеүселәр шул уҡ эҙмә-эҙлелектә килә, бары тик М. Прохоров был юлы инде Жириновскийҙы арттараҡ ҡалдырған.

Республика буйынса иң юғары күрһәткестәр Баймаҡ, Балтас, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Тәтешле, Хәйбулла райондарында теркәлгән. Бында Владимир Владимирович өсөн электораттың 90 проценттан ашыуы тауыш биргән. Дөйөм алғанда, был юлы ла ауыл райондары ҙур әүҙемлек күрһәткән. Ҡалалар араһында иһә Сибай ҡалаһына етеүсе юҡ, унда тауыш бирергә хоҡуҡлы граждандарҙың 79 проценты уҙ ихтыярын яңы ил башлығы файҙаһына белдергән.

"Һайлауҙар уңышлы һәм ойошҡан үтте, ышаныслы еңеү яуланды. Күпселек милли лидер өсөн тауыш бирҙе", - тине Рөстәм Рифат улы. Ул шулай уҡ быйылғы һайлауҙарҙың үҙенсәлегенә лә туҡталды: тауыш биреү барышы менән һайлаусылар йәки һайланыусылар ғына түгел, ә теләгә булған һәр кем Интернет селтәренә инеп, видеотрансляция аша танышa алды, сөнки барлыҡ Һайлау участкалары ла (дауаханалар, тикшереү изоляторҙарынан башҡа) веб-камералар менән йыһазландырылғайны.

В. В. Путиндың еңеүенә партияның урындағы бүлексәләре лә, халыҡ штабы ла ҙур өлөш индерҙе. "Беҙ штаб эшен беренсе тапҡыр агитация алып барыуға түгел, ә халыҡҡа мәғлүмәт таратыуға нигеҙләнек, шундай яңы форма уйлап сығарҙыҡ, - тине А. Мифтахов. - Ындай мәғлүмәти эш өгөтләүгә ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк икәнлеген күрһәтте. Халыҡ сәйәси карьераһының үренә менеп еткән, тормоштан бик күп "оролар" алған, аҡыл-зиһен туплаған кешелә илдең киләсәк үсешен күрҙе".

Бынан тыш, 4 мартта Өфө ҡала Советына ла депутаттар һайланды. Бында "Берҙәм Рәсәй" партияһы кандидаттары ҙур өҫтөнлөк менән еңеү яуланы. Йәғни 18 бер мандатлы һайлау округы буйынса фирҡәнең 12 кандидаты еңеүгә өлгәшкән һәм "Берҙәм Рәсәй" 21 мандатҡа дәғүә итә. Ләкин уҙған саҡырылыш менән сағыштырғанда уларҙа бер ни тиклем юғалтыу бар. Сөнки уҙған саҡырылышта "Берҙәм Рәсәй"ҙәр 24 мандатҡа эйә булған.

Һайлауҙар үтте, ләкин 2013 йылда "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе алдында икенсе мөһим сара - Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлау тора. Фирҡәнең уставына ярашлы, һайлауҙарға ярты йыл алдан кандидаттар праймериздар үткәрергә тейеш. Тимәк, был процедура быйыл көҙөн үк старт аласаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ, ӘЙ!

# ЯЛЫУҘАРҘЫ...

## ахмаҡтар ғына яҙамы?

**Интернет селтәрендә "Россиябездураков.рф" исемле сайт эшләй. Сайтты булдырыусылар унда төрлө ахмаҡлыҡ хаҡында мәғлүмәт йыя. Бөгөнгө көнгә сайтҡа 3114 рәсәйле уҙ зарын (ялыуын) ебәргән, шуларҙың 34-е - Башҡортостандан килгән ялыуҙар. Республика халҡы күп осраҡта нимә менән ҡәнәғәт түгел?**

**1-се урынды** биләгән бюрократик ахмаҡлыҡҡа ҡағылған ялыуҙар төбәк закондарына ғына ҡағылмай, ә бөтөн рәсәйлеләр өсөн дә актуаль. Мәҫәлән, сайтҡа юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыларға ҡарата, инвалидтарға ҡағылышлы закондарҙың камил булмауы һәм башҡа мәсьәләләр менән мөрәжәғәт итәләр. Торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәтләндереүе иң күп ризаһыҙлыҡ тыуҙырған өлкә булараҡ **2-се урынды** биләй. Бында күп осраҡта электр энергияһы һәм тәбиғи газ счетчиктарына ҡағылған проблемалар өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, кемгәләр фатирындағы счетчик "иҫәпләгәндән" артығыраҡ түләргә тура килә. Торлаҡ-эксплуатация идаралыҡтарында белдереүҙәренсә, тотош йорт һыу ҡулланыу буйынса лимитты арттырһа, уны түләү йорттағы бөтә фатирҙарға ла "бүлеп бирелә", имеш. Шулай уҡ сайтҡа һыуһыҙ интегеүсе ауыл халҡынан да ялыуҙар бар. Рәсәй өсөн быуаттар дауамында хәл ителмәҫ мәсьәләнең юлдар һәм иҫәрҙәр булып ҡала килеүен сайтҡа мөрәжәғәт итеүселәр тағы ла бер тапҡыр иҫбатлай. Нәҡ ошо ахмаҡлыҡ сайтта **3-сө урынды** биләй. Мәҫәлән, Бөрө ҡалаһынан мөрәжәғәт итеүсе "оҫталарҙың" нисек итеп ҡалалағы насар юлдар менән көрәшеүен бәйән итә һәм һүҙҙәрен фотоһүрәт менән дә йөпләй. Юл хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлеге арҡаһында яҙын-көҙөн Бөрө юлдары үтеп сыға алмаҫлыҡ һаҙлыҡҡа әйләнә икән. Шулай уҡ республика халҡын Өфөләгә бер яҡлы хәрәкәт тә, сәғәттең ҡышҡы ваҡытҡа күсерелмәүе, ғәҙел булмаған стипендия мәсьәләләре лә борсой.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә икенсел торлаҡ баҙарында һаман да хаҡ арта. 5 мартҡа ҡарата бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 52,26 мең һум тәшкил иткән. Фатирҙарға бер айҙа 1,9 процентҡа хаҡ күтәрелгән. Күбеһенсә бер бүлмәле фатирҙарға хаҡ артҡан - квадрат метрына 56,7 мең һум. Ике бүлмәлеләрҙең "квадраты" - яҡынса 50,86 мең һум, өс бүлмәлеләрҙекеке 49,6 мең һум тора. Йәшел сауҡалыҡ һәм Октябрь проспекты әүәлгесә иң популяр районнар булып ҡала.

✓Белгестәр билдәләүенсә, тәҙөлөп бөтөп барған йорттарҙағы фатирҙар тиҙ арала һатылып бөтә. Халыҡты уңайлыһыҙ планировкалы һәм беренсе ҡаттағы яңы торлаҡ артыҡ ҡыҙыҡһындырмай. Өфөлә һатылған фатирҙың уртаса хаҡы - 2,5 миллион һум, был алдағы айҙағы менән сағыштырғанда 200 меңгә арзаныраҡ, һәм икенсел торлаҡ баҙары (3,3 млн) менән сағыштырғанда 22 процентҡа арзаныраҡ. Ҡала баҙарында әле йәмғеһе өс меңдән ашыу фатир тәҡдим ителә. Һатыуға ҡуйылған фатирҙың уртаса майҙаны - 63,33 квадрат метр, ә хаҡы 3,3 миллион һум тәшкил итә.

✓Өфөнөң хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлек коэффициенты кәмеп, бөгөнгә көндә 0,64 тәшкил итә. Әлеге ваҡытта ҡаланың Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә 14300-ҙән ашыу вакантлы урын иҫәпләнә. Баш ҡала рәсми рәүештә теркәлгән 8600-ҙән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә, уларҙан яҡынса 7860 кеше эшһеҙлек буйынса пособие ала. Ҡаланың хеҙмәт биржаһында бөгөнгә көнгә йәмғеһе 9100-ҙән ашыу кеше иҫәптә тора.

✓Рәсәй дәүләт социаль университетының Өфөләге филиалы Өсөнсө быуын халыҡ университетында белем алыусылар өсөн Өфө буйлап экскурсия туры ойоштороҙо. Дәүләкән, Бөрө, Иглин һәм Ҡалтасы райондарынан пенсионерҙар, һуғышта ҡатнашыусылар, инвалидтар һәм хеҙмәт ветерандары Өфөгә килеүсе тәүге ҡунаҡтарҙан булды. Программаға индерелгән барлыҡ саралар - төшкө аш, баш ҡаланың иҫтәлекле урындарына һәм театрҙарына барыу ҡатнашыусылар өсөн бушлай ойошторолдо.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘГЕ...

## өс чемпионат көтөлә

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов 2012-2013 йылдарҙа үткәреләсәк донъя кимәлендәге спорт ярыштарына әҙерлек барышы менән таныштырҙы. Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, әҙерлек тейешле кимәлдә барғандай, һәр хәлдә, сит илдән килгән спортсылар, тренерҙар, көйәрмәндәр насар баһа бирмәҫкә тейеш беҙҙекеләрҙең тырышлығына.**

Ишеткәнһегеҙҙер, 2012-2013 йылдарҙа Өфө халҡын донъя кимәлендәге өс спорт ваҡиғаһы көтә: быйыл 18-23 сентябрҙә - Йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты; 2012 йылдың 26 декабрь-2013 йылдың 5 ғинуарында - Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей чемпионаты; 2013 йылдың 26 февраль - 3 мартында VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары үтәсәк.

Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей чемпионаты ярыштарының тап Өфөлә үтәсәге Германияның Кельн ҡалаһында ике йыл элек - 2010 йылдың 23 майында Халыҡ-ара хоккей федерацияһы конгресы ултырышында хәл ителгәйне. Был ярышта донъяның иң көслө 10 командаһы (Рәсәй, Германия, Канада, АҠШ, Словакия, Финляндия, Швейцария, Швеция, Чехия, Латвия) көс һынашасаҡ. Донъяның иң көслө хоккейсылары ике комплекста, үҙебеҙсә әйткәндә, "сәкән һуғасаҡ": Спорт һарайында А төркөмө - Швеция, Финляндия, Чехия, Швейцария, Латвия; "Өфө-Арена"ла Б төркөмө - Рәсәй, Канада, Словакия, АҠШ һәм Германия командалары осрашасаҡ. Сарала меңгә яҡын кеше ҡатнашыуы көтөлә.

Әле баш ҡалабыҙҙа был чемпионатҡа әҙерлек ҡыҙыу тоҫ алған: республика етәкселеге, "Газпром" менән спонсорлыҡ ярҙамы тураһында килешеп, ҡайһы бер объекттарҙы реконструкциялауға бюджеттан тыш финанс йәлеп итеүгә өлгәшкән. Бөгөнгө көндә чемпионатҡа әҙерлек сиктәрендә Өфөлә Спорт һарайы комплексын төҙәкләндереү бара.

- Спорт һарайын реконструкциялау эштәрен быйыл сентябрь тирәһендә, ахыр сиктә, октябрҙә тамамларға иҫәп тотабыҙ. Бөгөн был комплекста эштәр әүҙем бара, әммә хәл итә торған мәсьәләләр ҙә юҡ түгел, - тине Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Хөрмәт улы Дилмөхәмәтов журналистарҙы чемпионатҡа әҙерлек эштәре менән таныштырып. Ул "Олимпик-парк"та балалар өсөн спорт мәктәбе һәм база янында 120-190 автомобилгә иҫәпләнгән өс ҡатлы парковка төҙөләсәген дә билдәләне.

Ә VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарында тау саңғыһы, слалом, фристайл, сноубординг, спорт ориентацияһы, фигуралы шыуыу, егеттәр һәм ҡыҙҙар хоккейы, шорт-трек һәм саңғы буйынса ярыштар ҡаралған. Ярыштарҙа донъяның төрлө тарафтарынан йыйылған меңгә яҡын иң көслө 12-15 йәшлек спорт һөйөүсе балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашасаҡ. Был ярыш өсөн М.Ғафури исемендәге ял һәм культура паркында саңғы стадионын төҙөргә планлаштыралар, әле төҙәлеш өсөн майҙан әҙерләнә.

Быйыл үтә торған Йәйге биатлон буйынса донъя чемпионатына әҙерлек эштәре лә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Указына ярашлы башҡарыла. Өфө "Биатлон" комплексын реконструкциялау өсөн республика ҡаҙнаһынан аҡса бүленгән. Йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты республикабыҙҙа икенсе тапҡыр уҙғарыла. 2006 йылда үткән шундай уҡ ярыш юғары баһа алғайны.

- Бөгөнгө көндә "Биатлон" комплексындағы йүгереү өсөн тәғәйенләнгән асфальт юлды яҡшыртыу, бетондан төҙөлгән атыу урынын сиктәрәк күсереп, киңәйтеү планлаштырыла, бинаның түшәмен ремонтлау, Ағиҙел йылғаһы буйындағы ағастарҙы ҡырҡып, парковка урынын киңәйтеү ҙә талап ителә, - тип, халыҡ-ара стандарттарға яраҡлаштырып эшләнгән "Биатлон"да башҡарыласаҡ эштәр менән таныштырҙы Рәмил Дилмөхәмәтов. Уның фекеренсә, сит ил спортсыларын бөгөндән ҡабул итергә "Өфө-Арена" комплексы ғына тулыһынса әҙер. Ҡалған объекттарҙы финанслау мәсьәләһе март айында хәл ителәсәк.

Әйткәндәй, был чемпионатҡа әҙерләнеүселәргә милләтебеҙ, республикабыҙ һәм Рәсәй Федерацияһы тураһында ыңғай фекер ҡалдырыр саралар тураһында ла уйларға кәрәк. Йәғни, тәртип мәсьәләләре тураһында. Ошо ваҡиғалағы һымаҡ булмаһын. Һикһәненсе йылдар урталарында ул замандағы СССР студенттарын Балтика буйы илдәренең береһенә командировкаға ебәрәләр. Көндәрҙән-бер көндө егеттәр, 3-4 кеше, паркта йөрөп килергә тип сығып китә. Тирә-яҡ таптаҙа, бер ниндәй сүп-сар ҙа, хатта ҡыйыш ятҡан таш та юҡ, ти. Сейә һатып алып, эскәмйә һөйәнгесенә менеп ултырып, ашай башлай былар. Улары күреп, оло ғына йәштәге бер ҡатын, ошо республика вәкиле, ап-аҡ ҡына ҡулъяулығын сығара ла, асфальтҡа һибелгән сейә һөйәктәрен йыйырға тотона. "Үҙенә кәрәктер" тип уйлап, егеттәр һөйәктәрҙе әбейгә табан төкөрәләр икән. "Ул, моғайын, был орлоҡтарҙы алып ҡайтып, баҡсаһына сәсергә итәлер инде", тигән араларындағы бер егет. Егеттәрҙең сейәһе бөткәнен көткән әбей ап-аҡ ҡулъяулығындағы сейә төштәрен ипле генә итеп сүп-сар биҙрәһенә алып барып һала һәм үҙ юлы менән китеп бара. Шул саҡта ғына эштең ниҙә икәнен аңлай егеттәр. Шулай итеп, әбей был егеттәргә ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ һабаҡ бирә. Бынан ни әйтергә теләйем? Беҙ үҙебеҙ сит илдән килгән кешеләргә ниндәйерәк һабаҡ бирә алабыҙ ҙа, ниндәй өлгө күрһәтә алабыҙ? Абруйлы халыҡ-ара кимәлдәге саралар үтә башлаһа, ошо һорау борсой ҙа тора әле ул...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ТЕЛ ЗАКОНЫН БОҘҒАН ӨСӨН




**Былтыр июндә көсөнә ингән БР Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 2.3-сө статьяһы тел мәсьәләһенә ҡағыла. "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закондан айырмалы, был статьяла тел нормаларын һанға һуҡмаусыларға ҡарата ниндәй административ яуаплылыҡ саралары ҡаралған?**

- Статьяның пункттары ошолай яңғырай: "1. Башҡортостан Республикаһында Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһындағы норматив-хоҡуҡи акттарҙың боҙолоуы, телде ҡулланыуҙа граждандар хоҡуҡтарының инҡар ителеүе, телде белмәүгә һылтанып, граждандарҙы хеҙмәтләндереүҙән (туризм, мәғариф, мәҙәниәт хеҙмәте, медицина, сауҙа, транспорт, дөйөм туҡланыу, торлаҡ-коммуналь, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеүҙә) баш тартыуҙы иҫәпкә алып, әгәр бында Рәсәй Федерацияһы законында ҡаралған хоҡуҡ боҙоу билдәләре табылмаһа, граждандарға - 1 меңдән 2 мең һумға тиклем, вазифалы кешеләргә - 4 меңдән 5 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә 10 меңдән 15 мең һумға тиклем күләмдә административ штраф һалыу ҡарала.

2. Башҡортостан Республикаһы дәүләт учреждениелары мисәтен, фирма бланктарын эшләгәндә, дәүләт ойошмалары, халыҡ йәшәгән торaҡ пункттар, башҡа географик объект атамаларын яҙғанда Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен ҡулланыу тураһындағы норматив-хоҡуҡи акттарҙы боҙған өсөн вазифалы кешеләргә - 2 меңдән 3 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә 5 меңдән 8 мең һумға тиклем күләмдә административ штраф һалыу ҡарала.

3. Халыҡ йәшәгән торaҡ пункттар һәм урамдар исемдәрен яҙғанда, юл билдәләрен ҡуйғанда Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен ҡулланыу тураһында норматив-хоҡуҡи акттарҙы боҙған өсөн вазифалы кешеләргә - 3 меңдән 5 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә 8 меңдән 10 мең һумға тиклем күләмдә административ штраф һалыу ҡарала.

4. Башҡортостан Республикаһы предприятелары, учреждениелары һәм ойошмалары алтаҡталарын эшләгәндә Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен ҡулланыу тәртибе тураһындағы Башҡортостан Республикаһы норматив-хоҡуҡи акттарын боҙған өсөн вазифалы кешеләргә - 4 меңдән 5 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә 10 меңдән 15 мең һумға тиклем административ штраф һалыу ҡарала".

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Етен майы



Бөтөн үҫемлек майҙары араһында етен майы Омега-3 һәм Омега-6 майлы кислоталарға бай булыуы менән айырылып тора. Медицина тикшеренеүҙәренә ярашлы, ашау рационына етен майын индереү инсульты булдырмауы иң яҡшы сара иҫәпләнә, бының өсөн тәүлегенә 1-2 ҡалаҡ май ҙа етә. Етен майын ҡулланыу өсөн алдан табип менән кәңәшләшергә кәрәк. Шулай уҡ был май косметик маҡсатта ла ҡулланыла. Түбәндә гүзәл заттарға бер нисә ысул тәҡдим итәбеҙ.

**Ябығыу өсөн:** көн һайын бер тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда бер балғалаҡ етен майы эсегеҙ һәм был дозаны аҙна дауамында 1 ҡалаҡҡа еткерегеҙ. Ә киске аштан һуң тағы бер балғалаҡ май эсергә кәрәк. Бер айҙан һуң ауырлығығыҙ 3 килограмға, ә өс айҙан 7 килограмға кәмер.

**Целлюлитҡа ҡаршы пилинг:** етен майын тартылған ҡәһүәгә ҡушып болғатырға һәм ванна ингәндә проблемалы урындарға массаж яһарға. Тире шунда уҡ йомшара һәм һығылмалы булып ҡала.

**Таҙартыусы битлек:** йомортҡа һарыһы, лимон һуты һәм етен майын ҡушып болғатырға, бит һәм муйын тиреһенә һөртөп, 15-20 минутҡа ҡалдырырға. Бит тиреһендәге ҡара нөктәләрҙән ҡотолорһоғоҙ, йыйырсыҡтар ҙа һиҙелерлек кәмер.

**Дымландырыусы битлек:** ярты стакан ҡатыҡҡа 2 балғалаҡ етен майы ҡушып болғатығыҙ. Тирене таҙартҡандан һуң, дымландырыусы битлек итеп ҡулланығыҙ. Беренсе ҡулланыуҙан уҡ тәьҫирен яҡшы тойорһоғоҙ.

**Көндәлек крем:** көн һайын ҡулланған кремығыҙға бер аҙ ғына етен майы тамыҙығыҙ, уның файҙаһы күпкә көсәйәсәк.

**Ҡул һәм аяҡ тиреһе өсөн:** йомортҡа һарыһына бер ҡалаҡ етен майы ҡушырға һәм ҡул менән аяҡ тиреһенә һөртөп, 1 сәғәткә полиэтилен ҡапсыҡ кейеп торорға, һуңынан һабынһыҙ ғына йыуып, ҡағыҙ салфеткалар менән һөртөргә.

ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## КЕШЕГӘ КҮП КӘРӘК

**Кешегә был донъяла ифрат та күп кәрәк: күршенекенән ҙурыраҡ өй кәрәк, елдереп йөрөү өсөн машина кәрәк, ятып йоҡлау өсөн йомшаҡ түшәк, ултырып ашау өсөн заманса өҫтәл-ултырғыстар кәрәк. Бүтәндәрҙең уның тураһында яҡшы һүҙҙәр һөйләп, доға-аяттар бағышлатып тороуы кәрәк.**

Ә донъя ҡуйғас, шул тиклем әҙ кәрәк - метр ярым ер етә. Унынһы ла ерҙең өҫтөндә түгел, аҫтында. Ер өҫтөндә саҡта байлыҡтың теләгәнен булдырырға мөмкин - хәләл аҡса менәнме, урлапмы, талапмы, алдапмы. Шулай ҙа намыҫлы хеҙмәт, ике ҡул көсө менән генә үтә бай булып китеп булмай. Шөкөр итерлеге булһа, шул да етә былай. Нәфсеңде шаштырмауың шарт. Шулай ҙа сосораҡ, етеҙерәк, оятһыҙыраҡ, бурыраҡ булғанда әҙәм күҙен ҡыҙҙырырлыҡ итеп йәшәргә була. Ә бына кеше хәтерендә ҡалыу өсөн ул тиклем күп байлыҡтың булыуы ла шарт түгел. Кешегә ҡылған ябай ғына изгелек, яҡшылыҡ, ярҙам да етә. Ҡыҙыҡ был донъя - әҙәм балаһы донъя ҡуйған минутынан ғүмере буйы йыйған байлығына ла, күҙ ҡыҙҙырыр донъяһына ла үҙе хужа түгел, хатта ләхете алтын булһа ла...

Үткән йыл изге ураҙа айында бер яҡын әхирәтем олатаһы рухына ҡорбан салдырҙы. Икенсе көнөнә әсәйһенең төшөнә инеп, олатаһы рәхмәтен еткереп: "Рәхмәт ҡыҙыма, минә байтаҡҡа етерлек ризыҡ булды", - тигән. Донъялыҡта әхирәт тураһында ла уйланырға, әрүахтар хаҡында ла онотмаҫҡа ишара тип ҡабул иттем быны.

## ЮЛДА

**Минең тыуған көнөм йәй айында. Шуға был көндә, ғәҙәттә, туғандар менән тәбиғәткә сығабыҙ. Ул йылы Бетерәнең Үҙәнгә ҡойған еренә юлландыҡ.**

Юлыбыҙ Бөрйән - Сибай йүнәлешендә. Машинаға тейәлеп, ризыҡтарҙы тейәп, күңелле генә китеп барған саҡта юл буйында аунап ятҡан машинаға тап булдыҡ. Елле генә итеп ағас тейәгән булған. Түңкәрелеп ята. Юл ситендә ике кеше ултыра. Үтә биреп туҡтаныҡ. "Беҙ байрам итергә китеп барабыҙ. Бәлки, был кешеләрҙең ашарына ла юҡтыр, бәлки, медицина ярҙамы кәрәктер?" тип һөйләштек үҙ-ара. Сөнки өлкән апайым ғүмере буйы дауаханала шәфҡәт туташы булып эшләй. Машинанан төшөп, тегеләрҙең хәлен һораштыҡ. "Ашарыбыҙға ла бар, шөкөр, медицина ярҙамы ла кәрәкмәй. Хәҙер ярҙам килеп етергә тейеш, хәбәр иткәнбеҙ", тинеләр.

Аҙаҡ уларҙың хәбәре килеп етте. "Аптырап та, һөҡланып та ултырабыҙ, эргәнән бер генә машина ла туҡтамай үтмәне. Беҙҙең Ырымбур яҡтарында үлеп ятҡан кеше эргәһендә лә туҡтамайҙар..." тигән был бәләгә осраған юлсылар. Райондаштарым өсөн ифрат ҡыуандым. Күңел таҙалығы, ярҙамсыллыҡ тигән нәмәнең онотолоп бөтмәүе өсөн шатландым. Артабан да юғалтмаһаҡ ине ошо сифатыбыҙҙы...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# ӨЛӘСӘЙҘӘР...



## МАТУР ИҪТӘЛЕК ҠАЛДЫРҘЫ

**Өләсәйем Мәҙинә тураһындағы был иҫтәлектәрҙе әсәйемдән яҙып алдым. Өләсәйем таҡмаҡсы, йор һүҙле поэтик фекерләүсе һәм ғорур ҡатын-ҡыҙ образын үҙендә берләштерә. Иҫтәлектәрҙе лә ҡатын-ҡыҙ ғорурлығына, намыҫсанлығына маҡтау, тип атайым. Уның хоҡуҡтарын ҡырағайҙарса боҙалар, ә ул еңәнгә тиклем көрәшә, үҙ бәхетен тапҡанға тиклем яҙмышына баш бирмәй.**

Өләсәйем Имамова Мәҙинә Абдулла ҡыҙы 1908 йылда Баймаҡ районының Ислам ауылында тыуа. 12 йәшлек ҡыҙҙы, 14 сүмес һыуға көсө етә, тип, Юлыҡ туғайында йәшәүсе егеткә һораталар. Алдан ҡалым түләп, 2 йылдан кейәү ҡыҙҙы күсереп алып ҡайта. Ҡәҙимге йәшәп алып китәләр, йорт өҫтөндәге бөтә эште бергә башҡарып, тиҙ арала әсенешеп; татыу тормош биҙәге булып малайҙары донъяға килә. Баланың йәше тулыр-тулмаҫ борон уйламаған ерҙә атаһы үлеп китә. Иренең вафатынан һуң Мәҙинәгә күҙ атыусылар күбәйә. Сыңғыҙ ауылынан Ырыҫҡол һората. Тәүге килеүендә Мәҙинә риза булмай. Бер нисә айҙан тағы килә кейәү егете. Был килеүендә Мәҙинәнең ағай-энеһе уның менән ҡалым тураһында һөйләшә. 30 тәңкә аҡса, һарыҡ, һандыҡҡа килешәләр. Өсөнсөгә Ырыҫҡол ҡырандасҡа ултырып, ҡалым тейәп, кәләш алам, тип өмөтләнеп килә. Ләкин Мәҙинә балаһын ала ла ҡаса. Ырыҫҡол гәрләнеп ҡайтып китә.

Ауырыуҙан Мәҙинәнең сабыйы үлеп ҡала. Ҡайғыһынан арынып та өлгөрмәй, уны Йылым ауылына һората башлайҙар. Ағалары буласаҡ кейәүҙең ҡарт булыуына ҡарамай, уның бай булыуына ҡыҙығып, мул ғына ҡалым алып, Мәҙинәне кейәүгә бирәләр. Мәҙинәнең үҙенән алда даны барып еткәнлектән, Йылымға алып ҡайтыу менән табанын ярып ҡыл һалалар. Ҡарт ир, өйрәнмәгән ғәҙәттәр Мәҙинәнең үҙәгенә үтә. Һәр ваҡыт үҙе ҡарар сығарып өйрәнгән ҡатын бында ла оҙаҡ тотҡарланмай. Ҡарттың йоҡлап китеүенән файҙаланып, ҡасырға була. Ҡыллы аяҡтың һыҙлауына ла иғтибар итмәй, бар ауырлыҡтарға түҙеп, ете ҡат урман аша үтеп, Юлыҡҡа килеп сыға. Йылымдағы ҡарты милиционер эйәртеп килеп етә. Ул арала Мәҙинәне бер мәрйә ҡатыны эшкә яллап өлгөргән була. Башҡорт байының урыҫ байына һүҙе үтмәй, шулай итеп ҡарт кейәү буш ҡайтып китергә мәжбүр була.

Байҙарҙа көнлөксө булып эшләп йөрөгәндә граждандар һуғышы ялҡыны байҙары, муллалары, мөғәллимдәре менән дан тотҡан Юлыҡты ла ялмап ала. Күптәр, шул иҫәптән Мәҙинәнең хужаһы ла ауылды ташлап, аҡтар менән китеп бара.

Ике һуғышта ла йөрөп ҡайтҡан Ҡыҙыл ауылы егете Туйтирәков Әхмәтғәзиз большевиктар сәйәсәтен яҡлаусы була. Илдә барған үҙгәртеп ҡороуҙар кешеләрҙе, яҙғы ташҡынға эләккән юныҫҡылай, унлы-һуллы ташлай. Әхмәтғәзиз үҙенең укымышлылығы, кешелеклеге, кеселеклеге менән ауылда абруй ҡаҙана. Ул олоһона ла, кесеһенә лә ярҙам итә. Кешегә аңлатма, ғариза яҙырға, адрес тултырырға ярҙам итә, документтар менән эш итә. 1926 йылда Фатимаһы икенсе балаһына ғүмер бүләк иткәндә мәңгелеккә күҙен йома. Ҡулында йәш бала менән ҡалған иргә енел булмай, әлбиттә. Шул саҡ үҙе менән килгән Ғәбиҙә апаһы Ғәзизгә Мәҙинәне димләй. Күпте күргән ҡатын ирҙең иплелеген, аҡыллылығын ишетеп, күреп йөрөй, шуға ла уға кейәүгә сығырға риза була. Фатиманан тыуған Мәхмүтйән менән Фәриҙәнән башҡа, Әхмәтғәзиз менән Мәҙинәнең уртаҡ өс балалары тыуа: Рәхимйән, Фәүзиә (әсәйем), Марат.

1929-1930 йылдар. Колхозлашыу осоро. Әхмәтғәзиз Юлыҡта ойошторолған "Нариманов" исемендәге колхоздың тәүге рәйесе була. Халыҡ уны ярата, ихтирам итә. Ике колхозды ҡушҡас, Әхмәтғәзизде почта начальнигы итеп ҡуялар. Ауыр заманда ауылдаштарының ихтирамын яулаған рәйестең игелекле һыны халыҡ күңелендә оҙаҡ йылдар һаҡлана. Һуғыш йылдарында ла ул һәр кемдең ҡайғыһын уртаҡлаша, йыуата, ярҙам итергә тырыша. Бала-сағаға, ағаларына, аталарына хаттар яҙа, адрестар тултыра. 1945 йылдың 9 май көнөндә Енеү тураһындағы хәбәрҙе беренсе булып ауылдаштарына еткерә. 1945 йылдың сентябрь айында йөрәк сиренән дүрт сәғәт кенә ауырып вафат була.

Мәҙинә өләсәйем балаларының балаларын һөйөп, 1961 йылда донъя ҡуя. Уның ҡыйыулығын, мәҙәктәрен, йор һүҙле булыуын әле лә һөйләйҙәр ауылда. Бына шулай, үҙенән һуң яҡты иҫтәлек ҡалдырып киткән өләсәйем тураһында хәтергә алып, уны гәзит уҡыусыларға ла еткергем килде.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА.**
**Баймаҡ районы Ғүмәр ауылы.**

## НАСАР ӨЛГӨНӘН - ТӘҮБӘГӘ

**Беҙ, район гәзитендә эшләүсе журналистар, ауылдарға йыш сығабыҙ. Материал әҙерләргә лә, гәзиткә яҙҙырыу маҡсаты менән дә йөрөп ятабыҙ.**

Шулай бер саҡ журналист йомошо менән йөрөгәндә ҡоймаһыҙ, янында иҫке мунсанан тыш бүтән һарай-ҡаралтыһы булмаған бер йортҡа инергә тура килгәйне. Дөрөҫөрәге, саҡырып индергәйнеләр. Урамда уйнаған 5-6 йәшлек малай, өй һайын йөрөгәнде күрепме, беҙгә лә инегеҙ, тип ихластан ҡысҡырып саҡырҙы. Баланың һүҙен йыҡмайым, тип, уның артынан эйәрҙем. Ергә һеңеп барған йорттоң соланы, тупһаһы таҙа итеп ҡырып йыуылған. Алты мөйөшлө өйҙөң түрендә бишек эленгән. Уның янында 45-50 йәштәрҙәге ҡатын боронғоса, ҡолғаға элеп, йөн иләп ултыра. Тилбер бармаҡтар араһындағы яҡшы иғеп тетелгән йомарлам тиҙтиҙ генә нәҙек, тигеҙ епкә әйләнә. Ҡатын ауыҙ эсенән генә ниҙер һуҙа, моғайын, бишек йырын көйләйҙер. Малайы менән бергә ят кеше инеп килеүен күреп, урынынан һикереп торҙо, гәйепле кеше һымаҡ, юғалып ҡалды. Шул арала "Балаларҙың тамағы туҡ, һөт тә, май ҙа бар", тип, һыуытҡысын асып күрһәтә һалды. Шунда ғына мин үҙемдең журналист булыуымды, гәзиткә яҙҙырып йөрөүемде әйттем. Ҡатын кеше еңел һулап ҡуйҙы.

- Мин һеҙҙе опеканан килгәнһегеҙ икән тип уйланым. Ҡыҙымдың балаларын ҡарайым. Сәңгелдәктә ятҡанына ике йәш тә юҡ әле. Әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителде, тигән хәбәр ишетелгәс тә, балаларҙы эҙләп таптым да үҙемә алып ҡайттым. Бирмәй ҡыртлаштылар, әлбиттә, яҡын-тирәлә минең дә эскесе тигән яманатым сыҡҡайны бит. Егерме йылға яҡын эскәндән һуң, аҡтыҡ көсөмдә туплап, ошо балалар хаҡына яман ғәҙәтемде та-

***✓ Өй тирәләй күҙҙең яуын алып сәскәләр үҫә икән дә. Тәҙрә төптәрендә иһә халыкта "һөйөү елкәне" йәки "катын-кыз бәхете" тип йөрөтөлгән спатифиллум гөлө күпереп сәскә аткан. Бик һирәктәрҙә генә сәскә ата был гөл.***

шланым. Ҡыҙыма - уларҙың әсәһенә - тейешле тәрбиә, һөйөү бирә алмағаным өсөн үкенеп бөтә алмайым да, һуң шул. Ҡалған ғүмеремде ейәндәремә арнарға булдым. Алла миңә ярҙам итә, көс бирә, - тип башланы ҡатын еңел булмаған тормошо хаҡында хәтер йомғағын һүтеп. Оҙаҡ йылдар эсеп шаҡтай таушалһа, яңағында, ҡаш өҫтөндә тәрән яра эҙҙәре булһа ла, яңы танышымдың ҡасандыр бик һылыу ҡатын булғанын төҫмөрләп була.

- Үкһеҙ етем үҫтем мин. Атайымды бөтөнләй хәтерләмәйем, әсәйемдең эсеп үлгәнен беләм. Миңә өс-дүрт йәштәр самаһы булғандыр. Йәйҙең бер көнөндә артыҡ күп эсеүҙән айный алмай, күршеләрҙең ихатаһында яҡты донъя менән хушлашты ул. Бала сағым, үҫмер йылдарым шулай итеп балалар йортонда, интернатта, туғандарҙа йөрөп үтте. Медик булырға хыялландым. Атай-әсәй булмағас, уҡыу бәхете теймәне - ун һигеҙем тулыр-тулмаҫтан тормошҡа сыҡтым. Атай-әсәй һөйөүен күрмәгәс, исмаһам, Хаҡ Тәғәләм ир бәхете насип итер, тигән уйым да аҡланманы. Йәмәғәтем эсергә яратты. Етмәһә, ныҡ көнләшә ине. Тәүҙә, балам тыуһын инде, тинем, бала тыуғас, бер аҙ үҫһен инде, тип, айырылышыуҙы йылдан-йыл һуҙа килдем. Эскегә бирелеп китеүемдә иремде генә ғәйепләмәйем. Үҙемдең кешеләргә ярҙамсыл булыуым арҡаһында араҡы ҡолона әйләндем мин. Ҡаҙ өмәһенә, һарыҡ ҡырҡырға булһынмы, өй һыларға, баҡса ултыртырға, дебет иләргә - бөтә эш-йомоштарына ла мине саҡыра ине ауылдаштар. Һинең ҡулың түгел, Ғәйшә-Фатима ҡулылыр, тип, һалпы яғыма һалам ҡыҫтырҙылар. Эшем өсөн, әлбиттә, аҡса менән түгел, "аҡ баш" менән ризалаттылар. Арзан да, өҫтәүенә үҙҙәренә лә өлөш сыға.

Ҡыҙым ваҡытында йүнле тәрбиә күрмәгәс, бик тиҙ насар юлға баҫты. Эсте, тартты, юғалды... Ҡурсаҡ кеүек ҡыҙымдың ҡырын юлға китеүендә үҙем ғәйепле. Әрләргә, өгөт-нәсихәт бирергә лә хаҡым юҡ ине минең. Ятһам да, торһам да Аллаһы Тәғәләнән ҡыҙымды ғәфү итеүен, хаҡ юлға баҫтырыуын һорайым. Юғары Көс бар, барыбер ярҙам итәсәк. Үҙемә лә аяғыма баҫырға Ул булышлыҡ итте. Ошо балалар хаҡына Уның яҡшы юлға баҫтырыуын, күңелемде нурландырыуын, тәүфиҡ биреүен ялбарҙым, илай-илай һораным, тәүбәләр әйттем. Ярҙам итте, көс бирҙе Аллам.

Эсеүемде ташлағаныма береһе лә ышанмай. Элекке ҡыҫтай-ҡыҫтай эсергән күршеләрем мыҫҡыллы ҡараш ташлай, әммә миңә унан ҡыйын түгел. Үҙемдә ниндәйҙер эске ныҡлыҡ барлығын тоям. Уның көндән-көн нығынғанын һиҙәм. Кәүҙәм турайҙы, башым күтәрелде. Ә үткән көндәремде уйламаҫҡа тырышам. Алға ҡарап йәшәйем, бөтә теләгем - ейәндәремде лайыҡлы итеп үҫтерергә...

Ошо ваҡытта бишектәге бала тауыш бирҙе, ҡатын ғәфү үтенде лә, ҡулын сайып, өйҙөң иң түренә эленгән сәңгелдәккә ашыҡты. Шундай һөйөү менән ҡараны ул ейәненә, наҙ тулы күҙҙәр менән баҡты. Ҡояш нурынан да яҡтыраҡ, иркәрәк, йылыраҡ ҡарашты бала ла бөтә күңеле менән тойҙо һәм шунда ук тынысланды. Ул да булмай, мине саҡырып индергән шуҡ малай ҙа өләсәһе менән ҡустыһына барып һыйынды. Был илаһи мәлде, матурлыҡты боҙғом килмәне. Бер-береһенең йылыһын, мөхәббәтен, бер-береһенә кәрәклеген тойоп ултырһындар әйҙә, тинем дә, шым ғына ишеккә йүнәлдем.

Ихатаға сыҡҡас, аптырап ҡалдым: рәшәткәһе булмаһа ла, өй тирәләй күҙҙең яуын алып төрлө-төрлө сәскәләр үҫә икән дә. Тәҙрә төптәрендә иһә халыҡта "һөйөү елкәне" йәки "ҡатын-ҡыҙ бәхете" тип йөрөтөлгән спатифиллум гөлө күпереп сәскә атҡан. Бик һирәктәрҙә генә сәскә ата был гөл. Ә ингәндә мин уларҙы шәйләмәгәйнем...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*АЙЫҒАЙЫҠ!*

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР ЭСМӘҺЕН...

## ҡалғандар ҙа эсмәһен



**Элгәрерәк халайыҡтарҙы илен, ерен һаҡларға әйҙәгәндәр, мәле еткәс, күмәк хужалыҡҡа берләшергә, хәреф танырға, уҡырға-яҙырға өгөтләгәндәр, унан - удар хеҙмәт өлгөһө күрһәтергә, стахановса эшләргә... Дәһшәтле яу ҡупҡас, илде илбаҫарҙарҙан азат итеү хаҡына "Бөтәһе лә - фронт өсөн!" тигән саҡырыу ташлана. Һәм еңеп сыға халҡыбыҙ баҫҡынсыны. Оло еңеүгә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ индергән тос өлөш айырым урын биләй тарихта. Башҡа берәй заман күрҙе микән ҡатын-ҡыҙҙың үлсәүҙәргә һыймаҫ бындайын да фиҙакәрлеген?!**

...Тағын афәт баҫты илебеҙҙе. Был юлы дошман битлеген алмаштырҙы. Хәҙер ул ҡулына ҡорал тотоп, ҡара яу булып өҫтөбөҙгә килмәһә лә, күптән инде беҙҙең арала. Улай ғына тиһең, йортобоҙға үтеп инеп, иң түребеҙҙән урын яуланы: ике йәш йөрәк ҡауышамы, бәпес тыуамы, юбилей тантанаһымы - ул иң тәүге ҡунаҡ. Ана, ниндәй ҡәнәғәт ҡиәфәттә, тыштан ялтырап, ҡорһағын кәпәйтеп, мәжлес түренә менеп тә ҡунаҡлаған! Бына матур тантана башланып, бер нисә минут та үтмәҫ, баяғы дошман йыйылышҡан халайыҡтарҙың эсенә үтеп инеп, уларҙың ҡанын ағыулап, енен ҡотортоп, үҙенең ҡороҡослоғон, емергес эшмәкәрлеген башлап та ебәрәсәк. Ә шунан ни ҡубасаҡ бында! Ирҙәрҙең, ярай инде, әлеге "почетлы" дошман әсиренә әйләнеүенә күптән өйрәнгәнбеҙ, һыҙланыу-әрнеүҙәр аша булһа ла килешкәнбеҙ, тимәк, был алышта уларҙың еңеүсе булырына өмөттө өҙгәнбеҙ. Ғәжәп, ә бына бәғзе ҡатын-ҡыҙҙың да дошман ҡотҡоһона бирелеп, ошо юлда аунап ятыуы менән һис тә килешеп булмай, был ерәнгес күренешкә өйрәнеү мөмкин дә түгел. Ҡатын-ҡыҙҙың Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған махсус тәғәйенләнеше, кешелек һәм тәбиғәт алдындағы изге бурысы ирек бирмәй бындай яманлыҡ менән килешергә, сөнки ул милләт әсәһе, донъя ҡото, матурлыҡ тыуҙырыусы, изгелеккә әйҙәүсе. Үҙенә тыумыштан ошондай бурыстар йөкмәтелгән ҡатын-ҡыҙҙы баяғы "почетлы" дошман ҡосағында күҙ алдығыҙға килтереп ҡарағыҙ әле: сәс-башы туҙған, бит-күҙе күгәргән, шешенгән, ҡыҙарып-бүрткән бысраҡ, әрпеш кейемле ҡатын ҡайҙа етте, шунда аунап ята... Хәйер, ниңә күҙ алдына килтереп аҙапланырға: аҙым һайын хәҙер улар. Таныш-тонош, таныш булмағандар һәм хатта яҡындарыбыҙ араһында ла. Ғәрлеген дә, хурлығын да күтәрергә тура килә. Ҙур ҡалаларҙа, бәлки, бик күҙгә лә салынып бармайҙарҙыр, ә бына ауылда улар һәр ваҡыт күҙ менән ҡаш өҫтөндә. Өй беренсә йөрөп, "сәмәй" теләнселәйҙәр, унан йә урамда, йә кеше баҡсаһында, йә мунсала, уңайы тура килһә, алкаштар йыйыла торған үҙҙәре кеүек үк берәй яңғыҙаҡтың шыҡһыҙ һыуыҡ өйөндә йыйылышып яталар.

Шым ғына "сәмәй" етештереп, уны тамам юлдан яҙған әлеге алкаштарҙың хәйерсе аҡсаһына һатып ятыусылар ҙа күп ауылда. Улар кеше рәнйешенән дә ҡурҡмай, ауылдаштарынан да оялмай, үҙ кәсептәрен белә, ә урындарҙағы власть органдарының уларҙа эше лә юҡ. Әйткәндәй, урындарҙағы, бигерәк тә төпкөл ауылдарҙағы хакимиәт әһелдәре ни менән шөғөлләнә икән бөгөн? Туғандары, яҡындары тыйыуын һанға һуҡмаған хәлдә лә, власть органдарынан айбынырға тейеш тә һуң был эскеселәр? Ғибрәт, ләкин шундай замана килде: әсә, ир ҡатыны, өләсәй, ҡәйнә, ҡоҙағый, ағинәй булып, нурлы йөҙө, ипле холҡо, аҡыллы һүҙе менән үҙенән йәшерәктәргә өлгө һәм тәрбиә бирер ҡатындарҙы бөгөн араҡы эсмәҫкә, айыҡ аҡыл менән сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға өндәргә, саҡырырға, талап итергә тура килә. Тарихта ҡатын-ҡыҙ тарафынан ҡылынған ошонан да хурлыҡлыраҡ оятһыҙлыҡ бар микән? Юҡтыр һәм булмаҫтыр ҙа.

Ошо хурлыҡтың тап беҙ йәшәгән заманға тап килеүе, бөгөн ошондай саҡырыу ташларға мәжбүр итеүе ғәрләндерә - киләсәк быуын ни уйлар беҙҙең хаҡта, әсәйҙәр, апайҙар, һеңлеләр, килендәр, инәйҙәр? Балалар һәм ейәндәр үҫтереп, гөрләтеп баҡса бағып, мал-тыуар, ҡош-ҡорт тотоп, йортҡа ҡот ҡундырып, тормоштоң матурлығын, рәхәтен һәм ҡыуанысын татып йәшәүгә ни етә! Шағир әйтмешләй, был донъяға бәхет өсөн яралғанбыҙ икән - бәхетле булайыҡ, ул үҙебеҙҙән ҡулдарҙа.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАРҘЫҢ ҠАТЫН-ҠЫҘ КЕЙЕМЕНДӘ ЯУЛЫҠ



**XIX быуат һуңында - XX быуат башында ҙур булмаған дүрткел яулыҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының киң таралған баш кейеме булып торған. Ғәҙәттә, уны ҙур килеш, ике осон эйәк аҫтында тоташтырып бәйләгәндәр. Матур яулыҡтарҙы байрамдарҙа ғына ябыныр булғандар.**

Яулыҡтар элек йыш ҡына сәстәрҙе ҡаплап, ҡашмау йәки ҡама бүрек өҫтөнән ябынылған. Бары тик бәләкәй ҡалфаҡтарҙы яулыҡ аҫтынан, мәрйен йәки ынйы менән биҙәлгән ерен күрһәтеп кейгәндәр.

Яулыҡтар шәл менән бергә лә ябынылған. Диагональ буйынса ҡапланған ебәк йәки кешмир шәлде яулыҡ йәки бүрек өҫтөнә һалып ҡына ҡуйғандар, шуға ла уларҙың ике осо иркен булып һәленеп торған. XIX быуаттың икенсе яртыһынан шәлъяулыҡтар ҡулланылышҡа ингән. Ә Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында һәм Ырымбур далаларында һалҡынса көндәрҙә дебет шәл ябынғандар.

Башҡорт килендәренең көнсығыш Урал аръяғы һәм төньяҡ-көнсығыш кейем комплекстарына характерлы француз (флүр яулыҡ) яулығы инеүе Көнсығыш менән бәйләнеште асыҡ сағылдыра. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, Силәбе һәм Ҡурған, Урал аръяғында билдәле "ҡушъяулыҡ" хатта XX быуаттың беренсе яртыһында ла йәш ҡатын кейеменең колорит өҫтәмәһе булған. Уны туйҙың өсөнсө көнөнә, егет йортона күсер алдынан ябынғандар һәм һуңынан ул көндәлек яулыҡҡа әүерелгән. Силәбе, Ҡурған башҡорттарының ҡушъяулығы декоратив биҙәлеше менән айырыуса айырылып торған. Ул ҡолаҡ тирәһендә мәрйендән һәм ҡәнәфер орлоҡтарынан эшләнгән ҡолаҡсуҡҡа һәм мәрйен йәки мәрйен селтәр йә тәңкәләр менән биҙәлгән һаҡалдырыҡҡа эйә булған. Ҡурған өлкәһендә һаҡалдырыҡтың уртаһынан күкрәккә үрелгән ептәр йәки сигелгән бәләкәй генә таҫма - эйәксен төшөп торған. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ҡушъяулыҡты бары тик ике рәт итеп тегелгән тәңкәләр менән биҙәлгән әүеркә таҫма - һағалдырыҡ ҡына биҙәгән.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының костюм комплексында ҡушъяулыҡ, ябай яулыҡ кеүек үк, бәләкәй генә ҡалфаҡ менән ҡушарланған; көнсығыш Урал аръяғында иһә - ҙур булмаған ҡыҙыл яулыҡ - һыңар яулыҡ, баш бәйҙәмесе менән ҡушарлап ябынылған.

Туйҙа кәләштең ҡушъяулығы өҫтөнә тура мөйөшлө туҡыма ташлағандар - ул ҡыҙҙың йөҙөн ҡаплап торған. Шул килеш ул әхирәттәре оҙатыуында туғандары менән хушлашҡан, уларға бүләктәр тараҡан. Танып һәм Кама буйындағы төньяҡ башҡорттарында был йола ул тиклем ҡәтғи булмаған һәм бер төҫлө ҡыҙыл яулыҡ - бөркәнсек кенә ҡапланылған. Башҡортостандың ҡайһы бер территорияһында ҡушъяулыҡҡа оҡшаш әйберҙәр күҙәтелмәй. Киленде кейендергәндә уға ғәҙәти шәл ябындыралар һәм билен ҡушаҡ менән бәйләп ҡуялар. Башына ҡаплар өсөн туҡыманан тегелгән елән йәки матур сәкмән ҡулланғандар.

Көнсығыш Урал аръяғында үткән быуатта бер ни тиклем икенсе төрлөрәк костюм комплексы - таҫтар-хараус - һаҡланған. Ул бейек, ҡиммәтле башкейем һәм күкрәк-арҡа биҙәүесе - яға-иңһәлек менән бергә кейелгән. Ҡушъяулыҡтың киң таралыуы атап үтелгән барлыҡ башҡа баш кейемдәренең юғалыуына, юҡҡа сығыуына килтергән. Бары тик яға ғына оҙағыраҡ йәшәгән.

**Светлана ШИТОВА.**

✓ *Ғалим ҡатыны булыуы еңел түгел. Фәндә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн үҙеңде уға тулыһынса бағышларға кәрәк. Шуға ла иреңдең ғаиләһенә ҡарағанда фәнгә күберәк иғтибар бүлеүенә күнә белеү фарыз.*

# ЯҠШЫ УЛЫҢ ҠОРҘАШЫНДАЙ

## ЯҠШЫ КИЛЕН

**"Фән" тип аталған мөһабәт бинаны атланттар ғына түгел, шулай уҡ кариатидалар - ғалим ирҙәренең ҡатындары ла үҙ иңдәрендә күтәреп тора. Әгәр ҙә ғалимдарҙы көнкүрештең ваҡ-төйәктәренән аралап, уларға һәр ваҡытта ла рухи терәк булыусы ҡатындары булмаһа, улар күп нәмәгә өлгәшә лә алмаҫ ине, моғайын. Яҙҙың тәүге көндәрендә ошондай гүзәл заттарыбыҙҙың береһен - тел ғилеме белгесе, филология фәндәре кандидаты, әҙәби тел тарихы, стилистикаһы һәм башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса күп хеҙмәттәр авторы Вәли Шәғәли улы Псәнчиндың тормош иптәше Лилиә Барый ҡыҙы КИЛМӨХӘМӘТОВАны әңгәмәгә саҡырып, тәрбиә, матурлыҡ тураһында һөйләшеп алдыҡ. Лилиә апай ғалим ҡатыны ғына түгел, башҡорт фәненә ике доктор тәрбиәләгән әсә лә. Псәнчиндарҙың өлкән улы Юлай Вәли улы филология фәндәре докторы, профессор, М. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университеты Өфө филиалының рус һәм сит филологияһы кафедраһы профессоры. Кесе улдары Айбулат Вәли улы география фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнология бүлеге мөдире, шулай уҡ БДУ-ның физик география, крайҙы өйрәнеү һәм туризм кафедраһы мөдире вазифаһын башҡара.**

**▸ Лилиә апай, һеҙҙе барыһы ла хәстәрлекле ҡатын, милләт өсөн яҡшы балалар үҫтергән гүзәл зат итеп белә. Һеҙҙе Вәли Шәғәли улы менән ниндәй юлдар осраштырып ҡауыштырҙы?**

- Мин Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылында тыуғанмын. Атайым хәрби кеше булды, һуғыштан әйләнеп ҡайтманы. Һуғыштан һуң атайҙан үлем хәбәре килгәс, беҙ Өфөгә күсеп килдек. Һеңлем менән 9-сы мәктәптә белем алдыҡ. Мәктәпте тамамлаған йылда һеңлем ауырып китте лә, уны аяҡҡа баҫтырыу беҙҙең бар маҡсатыбыҙға әйләнде. Шуға ла мин институтҡа барыу уйымдан баш тартып, ситтән тороп китапхана техникумына уҡырға индем һәм Мәғариф министрлығына машинкала баҫыусы булып эшкә урынлаштым. Шул ваҡытта БДУ-ны тамамлап, өс егет инспектор булып эшкә килде, улар араһында ағайығыҙ ҙа бар ине. Вәлиҙе дәреслектәр бүлеге мөдире итеп ҡуйҙылар. Ул үҙенең йомартлығы, кешелеклеге менән башҡаларҙан айырылып тора ине, холҡо ла бик оҡшаны. Өйләнешеп, бер йыл йәшәгәс, аспирантураға уҡырға инде. Минең уҡырға теләгем тағы ла тормошҡа ашмай ҡалды, сөнки икебеҙ ҙә бер юлы уҡый алмай инек. Быға бер ҙә үкенмәйем, З. Вәлиди исемендәге (элекке Крупская исемендәге) Республика милли китапханаһында ла, аҙаҡтан 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә китапханасы булғанда ла, һуңынан БДУ китапханаһында библиограф булғанда ла гел яҡшы кешеләр араһында эшләнем, ирем дә ғүмеремде уға бағышлауымды юғары баһаланы.

**▸ Улдарығыҙҙа атайҙарының ниндәй сифаттарын күрергә теләй инегеҙ? Ғөмүмән, һеҙҙең ғаиләлә улдарығыҙ тәрбиәһендә беренсе урынға ниндәй ҡағиҙә, талап ҡуйылды?**

- Иң тәүге талап - ғаиләлә балалар башҡортса һөйләшергә тейеш, беҙ был турала алдан уҡ килешеп ҡуйҙыҡ. Унан һуң, күңелдәренә мөмкин тиклем милли рух, ғәм, сәмһалырға тырыштыҡ. Аталары ғалим булғас, улдарыбыҙ ҙа фәнгә тартылды. Икеһе лә 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә уҡыны. Тәрбиә эшендә мәктәптең, бигерәк тә, милли мәктәптең ролен инҡар итергә ярамай, ул ғаилә биреп еткермәгәндәрҙе лә бирә, бигерәк тә милли тойғо, дуҫлыҡ, үҙ милләтенә туғанлыҡ хисе һеңдерә. Әсәй булараҡ, был мәктәпкә мин ныҡ рәхмәтлемен.

Бала тәрбиәләгәндә мотлаҡ атай абруйы булырға тейеш, мин быға өлгәшә алдым, Юлай ҙа, Айбулат та аталарын ихтирам итә. Татыу йәшәнек, өйҙә бер ҡасан да талаш, берберең яман һүҙҙәр әйтеү булманы, сөнки Вәли бик тыныс, аҡыллы, сабыр холоҡло кеше. Иң ҡыҙығы, ул әрләшә белмәй. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡайһы берҙә артыҡ сабырһыҙланып китә торған ҡылығы бар, өйләнешкән осорҙа мин дә бер-ике тапҡыр әрләшергә итеп ҡарағайным, ул шунда: "Мине ата-әсәйем әрләшергә өйрәтмәне", - тип кенә яуап бирҙе. Балаларға ла тауыш күтәрмәне, эргәһенә ултыртып, тыныс ҡына итеп аңлата ине. Мине ғүмер буйына "көләш" тип йөрөтә, нимә бешерһәң дә һайланмай ашай, ашағас, рәхмәтен әйтә. Туған йәнле.

Айбулат бик тә атаһына оҡшаған, тыныс холоҡло, ваҡ-төйәккә иғтибар итеп бармай. Юлай хис-тойғоға бай. Уйындағын әйтә лә шунда уҡ кире ҡайта, бөтә нәмәне йөрәгенә яҡын ала. Бар ерҙә лә гәҙеллек эҙләй, эшләгән ерендә берәй студентты нахаҡҡа йәберләһәләр ҙә күтәрелеп сыға.

Балаға нотоҡ уҡып ҡына тәрбиәләп булмай, улар бар нәмәгә лә атайға ҡарап өйрәнергә тейеш, тигән ҡараштабулды Вәли. Унан, уҡытыусы кешенең ул ваҡытта эше лә күп ине бит, агитатор ҙа булып йөрөйҙәр, етмәһә, факультетта ғүмер баҡый профбюро рәйесе, партбюро секретары урынбаҫары, ағзаһы вазифаларын ихлас "тартты", ә йәмәғәт эше ваҡытты күп ала. Ул БДУ-ла уҡытҡан саҡта дәрестәре лә күп булды, кистәрен киске бүлектә белем бирҙе. Милли мәктәптәр институтының филиалын етәкләне. Ғөмүмән, башҡорт теленең бөтә үҙенсәлектәрен белгән ғалим булды, күп китаптар сығарҙы. Әлбиттә, улдарыма атайҙарының иғтибары етеңкерәмәне етеүгә. Хәҙер уларға, үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы тәрбиәләгәндә бындай яңылышлыҡ ебәрмәгеҙ, тип әйтеп кенә торам.

**▸ Һеҙҙең кеүек хәстәрлекле, ғаиләһе өсөн өҙөлөп торған әсәй килендәрҙе лә үҙ балаһылай ҡабул иткәндер?**

- Ике улыбыҙ ҙа һөйләп өйләнеп, һөйләп атай булдылар. Фән менән шөғөлләнгән ғалимдарға ғаиләне лә тартыуы ауырыраҡ шул, шуға ла ғаилә ҡороуға бик етди ҡаранылар. Ике киленебеҙ ҙә Дим буйы ҡыҙҙары. "Әгәр ҙә берегеҙ ауыл ҡыҙына өйләнә икән, икенсегеҙҙеке лә ауылдан булырға тейеш, икеһе ике мөхиттә тәрбиәләнгән булмаһын", - тип алдан уҡ улдарыма әйтеп ҡуйғайным, тынланылар. Үҙебеҙ менән бергә йәшәгән өлкән улыбыҙ Юлайҙың көләше Гөлназ килен Р. Нуреев исемендәге Өфө хореография колледжында башҡорт теленән уҡыта. Хәҙерге заманда бер йүнәлешле белем менән генә булмай, мин иҫән саҡта тағы берәй һөнәр ал, ярҙам итермен, тигәс, әле юрист һөнәрен дә үҙләштереп йөрөй. Ул килен булып төшкәс тә минә "әсәй" тип әйтте, ҡайныһы "атай" тип әйтеүҙе оҡшатманы, минә "атай" тип әйтер улдарым бар, "ҡайным" тип өндәш тине. Юлайҙарҙың ҡыҙы Гөлнәзирә быйыл уҡырға бара, Даниярға өс йәш. Икеһе лә башҡортса тап-таҙа итеп һөйләшә. Кесе киленебеҙ, Айбулаттың көләше Регина Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бухгалтер булып эшләй. Игеҙәк ҡыҙҙары бар, әле бәләкәстәр, береһенең исеме Әминә, икенсеһенеке - Алһыу.

**▸ Тимәк, һеҙгә Вәли Шәғәли улы менән бергә "уҡырға", ғилми эште бергә "яҙырға" тура килһә, килендәрегеҙгә әҙер ғалимдар эләккән. Ғалим ҡатыны һәм ғалим әсәһе булыу араһында айырма бармы?**

- Ғалим ҡатыны булыуы еңел түгел. Фәндә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн үҙеңде уға тулыһынса бағышларға кәрәк. Шуға ла иреңдең ғаиләһенә ҡарағанда фәнгә күберәк иғтибар бүлеүенә күнә белеү фарыз. Унан һуң, ғаиләләге эштәр, балалар тәрбиәләү күберәк һинең иңеңә төшә бит. Вәли, башҡа фән эшмәкәрҙәре кеүек, Өфө буйлап машинкала баҫыусы эҙләп йөрөмәне, бар китаптарын, хеҙмәттәрен машинкала үҙем баҫтым. Библиограф булараҡ, Вәлигә лә, улдарыма ла мөмкин тиклем ярҙам иттем, ниндәй китап һораһалар, шул уларҙың өҫтәленә килеп ятып ҡына торҙо. Юлайға ла ғилми эштәрен баҫырға ярҙам иттем, компьютерҙар барлыҡҡа килгәс кенә был эшемдән туҡтаным. Ә Айбулаттың үҙен машинкала баҫырға өйрәттем. Өлкәненә докторлыҡ диссертацияһын яҡлағанда 37 йәш ине, Айбулатҡа 37 йәш тә тулмай ҡалды.



*Бала тәрбиәләгәндә мотлаҡ атай абруйы булырға тейеш, мин быға өлгәшә алдым, Юлай ҙа, Айбулат та аталарын ихтирам итә. Татыу йәшәнек, өйҙә бер ҡасан да талаш, бер-береңә яман һүҙҙәр әйтеү булманы, сөнки Вәли бик тыныс, аҡыллы, сабыр холоҡло кеше. Иң ҡыҙығы, ул әрләшә белмәй. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡайһы берҙә артыҡ сабырһыҙланып китә торған ҡылығы бар, өйләнешкән осорҙа мин дә бер-ике тапҡыр әрләшергә итеп ҡарағайным, ул шунда: "Мине ата-әсәйем әрләшергә өйрәтмәне", - тип кенә яуап бирҙе. Балаларға ла тауыш күтәрмәне, эргәһенә ултыртып, тыныс ҡына итеп аңлата ине. Мине ғүмер буйына "көләш" тип йөрөтә, нимә бешерһәң дә һайланмай ашай, ашағас, рәхмәтен әйтә. Туған йәнле.*

***✓ Ҡатын-ҡыҙ һәр нәмәлә, хатта иренenә ҡыҙыл һөрткәндә лә, кейенгәндә лә сама белергә тейеш. Сама белеү - ана шул матурлыҡтың нигеҙен тәшкил итә лә инде.***

# БУЛЫР...

## серҙәшендәй булыр

**▸ Псәнчиндарҙың башлыса ир-егеттәрҙән торған ғаиләһендә хәҙер ҡыҙҙар ҙа күбәйә башлаған, ейәнсәрҙәрҙе тәрбиәләүҙә ҡатнашаһығыҙмы?**

- Гел ҡыҙҙар араһында тиерлек үҫкәнгә, үҙемдең улдарым тыуғас, дөрөҫөн әйткәндә, тәүҙә аптырап та ҡалдым. Холҡом буйынса ҡатымын, тәртип яратам, шул сифаттарым миңә малайҙарҙы ҡулда тоторға ярҙам иткәндер.

Тәүге ейәнсәрем Гөлнәзирә тыуғас, тағы бер аптыраным. Ҡыҙ балаға бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт кәрәк икән, саҡ ҡына ҡатыраҡ өндәштеңме, шунда уҡ күҙҙәренән йәштәре тәгәрәй ҙә башлай. Гөлнәзирә өсөн йәнем сыға яҙа, илай башлаһа, һушымды юғалта яҙам, етмәһә, ул бит балаңдың балаһы, бигерәк ҡәҙерле! Ҡырын күҙ менән дә ҡараткым килмәй үҙенә. Киленем: "Әсәй, улай ярамай, гел әпәүләмә", - ти. Бергә йәшәгәс, балаларҙы тәрбиәләүҙә бер һүҙле булайыҡ, тип килештек. Ҡыҙ кеше булараҡ, көҙгө алдынан китмәй, биҙәнергә, бейергә ярата. Мин үҙем бәләкәйҙән бейергә яраттым. Көйәнтә менән һыуға китеп барам, атайымдың ағаһы мине урамда туҡтата ла, ҡыҙым, бейеп кит инде, тип үтенә. Шулай һыуға барышлай ҙа, ҡайтышлай ҙа уның эргәһендә бейеп китә инем. Аҙаҡтан, ҡалаға күскәс тә, балерина булам, тип хыялланып, карауаттан карауатҡа һикереп йөрөгәнем хәтерҙә. Элек уҡытыусылар йорто була тоғайны, эшләгән саҡта шунда бейенем, хатта Юлайға ауырлы көйө концертта сығыш яһап йөрөнөм. Аҙаҡтан ғаилә мәшәҡәттәре баҫып китте, ҡайҙа инде бейеү. Хәҙер бына Гөлнәзирәм гел бейеп кенә тора. Килен, әллә кемгә оҡшаған, тип аптырай, мин өндәшмәйем.

Үҙем ҡәйнә менән йәшәп ҡарағаным булманы. Минең менән киленемә нисектер, әммә мин унан бик ҡәнәғәтмен. Һигеҙенсе йыл китте бергә йәшәүебеҙгә, бер һүҙгә килгәнебеҙ юҡ. Ул бешеренһә, мин ҡыҫылмайым, аш-һыуға бик оҫта. Килендәргә хас тағы ла яҡшы сифаты бар: нимә әйтһәң дә, һүҙ күтәрә белә. Улдарыбыҙҙан да уңдыҡ, килендәребеҙҙән дә, Аллаға шөкөр.

**▸ Башҡорт халҡында "Килен ҡәйнә усағынан" тигән мәҡәл бар, килендәрегеҙ менән бик ҡәнәғәтһегеҙ, ә үҙегеҙ килен булып төшкәс, ҡәйнәгеҙҙән ниндәйҙер һабаҡтар алып өлгөрҙөгөҙмө?**

- Вәли Күгәрсен районының Беренсе Дәүләтҡол ауылында тыуып-үҫкән. Минең ике ҡәйнәм булды, атаһының әсәһе - уны инәй тип йөрөтәләр ине, бергә йәшәйҙәр ине. Ул ун ете йыл буйына мәҙрәсәлә ҡыҙҙар уҡытҡан белемле ҡатын булды, бөтөн ауылдың балаларының кендек инәһе, шуға ла был өйҙә дини йолалар еренә еткереп үтәлә ине. Ҡайным мәктәп директоры булып эшләп йөрөгән еренән һуғышҡа киткән һәм ҡайтмаған. Вәлиҙең ике ағаһы ла уҡытыусы, уларҙың береһе, оло ағаһы (ҙур абызый) шулай уҡ һуғыш яланында ятып ҡалған. Тағы ла ике ҡайынһеңлем булды. Бына шундай уҡымышлы ғаиләгә килен булып төштөм. Ҡәйнәмдең юғары уҡыу йорттарында алған белеме булмаһа ла, бик зирәк аҡыллы, үҙе иҫ киткес сибәр, зифа һынлы, оҙон сәсле ине. Мине ныҡ яҡын күрҙе, әхирәттәр кеүек булдыҡ уның менән. Бер ҡасан да, дөрөҫ эшләмәйһең, тип бит йыртманы, үҙе эшләп күрһәтер ине. Уның кеүек туҡмас йәйгән кешене күргәнем юҡ, йәймәһен күтәреп ҡараһаң, күршеләге йорт күренер ине. Туҡмас ҡырҡһаң, ҡалай матур ҡырҡҡанһың, бер-ике көндән тағы ҡырҡып алырһың, тип маҡтап, күңелде күтәреп ебәрә торғайны. Иртәрәк донъя ҡуйҙы, замандың ауырлығы ла, һуғышта ирен һәм кесе улын юғалтыу ҡайғыһы ла үҙенең ролен уйнағандыр инде.

Псәнчиндар туғанлыҡтың ҡәҙерен беләләр. Бер-береһе өсөн өҙөлөп торалар, туғанлыҡты иң оло байлыҡ, тип иҫәпләйҙәр. Мин кейәүгә сыҡҡас, үҙемдең Маһинур нәнәйем миңә ике кәңәш бирҙе. Беҙ загстан яҙылышып сығыуға ауылдан улар ҙа килеп еткәйне, шунда миңә: "Ирең менән һәйбәт йәшәгең килһә, уның туғандарына һәйбәт бул, ғаилә тормошонда был иң мөһим ҡағиҙә", - тине. Күңелемә һалып ҡуйғанмындыр инде уның был кәңәшен. Вәлиҙең туғандары минең өсөн өҙөлөп тора, хатта, еңгәбеҙҙе ағайыбыҙға ҡарағанда ла нығыраҡ яратабыҙ, тиҙәр. Туғандарына шундай мөнәсәбәттә булғас, ирем дә ҡәнәғәт һәм күңеле тыныс булды. Ғөмүмән, ирем, уның туғандары, башҡа кешеләр менән мөнәсәбәт ҡорғанда гел генә нәнәйемдең аҡыллы кәңәштәрен иҫтә тоттом, тиергә була. Минең ҡартатайым старшина, ә нәнәйем уның өсөнсө ҡатыны була. Октябрь революцияһынан һуң ҡартатай ике ҡатынын ирекkә ебәреп, нәнәйем менән генә йәшәй. Нәнәйемдең бик аҡыллы булыуы ғаиләһен һаҡлап ҡалырға мөмкинлек биргәндер, тип уйлайым. Уңған ине, ямғыр яуһа, тиҙ генә ихатаны, урам алдын һеперепт ҡуйыуы ныҡ хәтеремә уйылып ҡалған. "Эшләй торған эшеңде кистән эшләп ят, иртәнсәк торғанда бөтә нәмә урынында булһын", - был уның миңә биргән икенсе кәңәше. Бынының да гел үтәп йәшәнем.

**▸ Ҡатын-ҡыҙ матур булырға тейеш, тибеҙ, матурлыҡ аныҡ төшөнсә булмаһа ла, уны һеҙ нисек аңлайһығыҙ?**

- Ҡатын-ҡыҙ һәр нәмәлә, хатта иренenә ҡыҙыл һөрткәндә лә, кейенгәндә лә сама белергә тейеш. Сама белеү - ана шул матурлыҡтың нигеҙен тәшкил итә лә инде. Күлдәк һатып алыуын һорап, ире менән талашҡан, мода артынан ҡыуыуҙы йәшәү маҡсатына әүерелдергән ҡатындар була. Мин ундайҙар рәтенән түгелмен, шулай ҙа ҡатын-ҡыҙ матур кейенә белергә тейеш, тип иҫәпләйем. Ғәли Сәйетбатталов гел генә: "Үҙең дә, кейемең дә матур", - тиер ине. Ғөмүмән, иремдең хеҙмәттәштәре мине бик ихтирам итте. Мин электән артыҡ биҙәнеүҙе яратманым, бер ҡасан да сәс буяманым. Оҙон сәсле ҡыҙ инем, тулҡынланып торған сәсте икенән үреп йөрөттөм. Шулай уҡ тәбиғи таштарҙан эшләнгән муйынсаҡтар, алҡа тағырға яратам. Алтын алҡаларымды ейәнсәрҙәремә инселәп һалып ҡуйғанмын.

Матурлыҡ - ул сәләмәтлек тә. Гүзәл зат үҙен йәштән үк тәрбиәләргә тейеш. Һинең сәләмәт булыуың үҙеңә генә түгел, ireңә, балаларыңа ла кәрәк. Иртән торғас та ярты стакан һыуға бер балғалаҡ бал болғап эсеп ебәрегеҙ, ашҡаҙаныгыҙға дауа булыр. Мин йәй көнө еләкте күпләп ашайым, ул ашҡаҙан-эсәк өсөн файҙалы. Шулай уҡ үҙеңде тыныс тоторға, сиктән-сиккә һуҡҡыланмаҫҡа, юҡҡа борсолмаҫҡа кәрәк. Аяҡтар һыҙлап йонсотһа, спиртта төнәтелгән бәпембә һөртәм, бик ярҙам итә.

Иң яратҡан шөғөлдәремдең береһе - төрлө аҙыҡ бешереү. Бигерәк тә әсе ҡамыр ҡуйып, төрлө бәлештәр бешереү оҡшай. Ҡунаҡ һыйлау өсөн сәбәбен табып ҡына торам. Ҡатын-ҡыҙ эше менән булышыу күңелемә һиллек өҫтәй, ошондай саҡта рәхәтләнеп ял итәм. Баҡса үҫтерергә яратам, баҡсамда виноградтан алып һырғанағына тиклем бар емеш-еләк үҫә. 13 төрлө дарыу үләне үҫтерәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Мин бөгөн нимәгә өлгәшкәнмен, ниндәй уңыштарым бар, быларҙың барыһы өсөн дә уға бурыслымын", - тигәйне Вәли Шәғәли улы Лилиә апай тураһында. Һәр осраҡта ла терәк була белгән, нәҫелен дауам итерҙәй бынамын тигән улдар тәрбиәләгән ғүмер юлдашына ҡарата бирелгән ошо баҫалҡы ғына баһа Лилиә Барый ҡыҙын бар яҡлап аса ла ҡуя. Халыҡ дөрөҫ әйтә: яҡшы ир менән ҡатын хур булмай, яҡшы ҡатын менән ир үҙ моратына өлгәшә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# БАҘАР ЗАМАНЫ

## Кемдер һата, кемдер ала...



**Аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ юҡ бөгөн. Магазин кәштәләрендә, баҙарҙа йәнең теләгән аҙыҡты һатып алырға һәм төрләндереп аш-һыу әҙерләргә мөмкин. Ҙур ҡалаларҙа ғына түгел, ә һәр бер ауылда кәмендә генә икешәр магазин бар. Элек ауылдарҙа билмән, ит котлетын тик өйҙә генә яһайҙар ине, хәҙер иһә уларын да магазиндан ғына алырға мөмкин. Һөт аҙыҡтары менән дә шул уҡ хәл. Быларҙың барыһын да күҙҙән үткәргәс, был өлкәлә аҡса эшләрлек "тишек" ҡалмаған да кеүек күренә. Ләкин күренә генә...**

Мин Өфө районы Булгаково ауылында йәшәйем. Өйөбөҙгә урман да, йылға ла яҡын, болондар ҙа бар, шуға күрә һыйыр тотабыҙ. Йәйен әллә ни ауырлыҡ булмаһа ла, ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләү бер аҙ мәшәҡәтле. Шулай ҙа тырышһаң, был мәсьәләне лә хәл итеп була. Ә һыйыр тотоу икеләтә уңайлы һәм файҙалы, сөнки, беренсенән, йәйен һөт-ҡатыҡ эсеп, ә ҡышын ит ашап кинәнәбеҙ. Икенсенән, ғаиләбеҙҙә өс кенә кеше булғас, һөт тә, ит тә артып ҡала. Шуға күрә күрше-тирәгә йәйен һөт-ҡаймаҡ, ә ҡышын ит һатып, бер аҙ аҡса эшләйем. Хаҡтарҙы үтә "тешләшерлек" итеп ҡуймайым, ә даими һатып алыусыларыма ташлама ла яһайым. Был клиенттарымды арттырыуға булышлыҡ итә.

Шулай уҡ һатып алыусыларымдың йылдан-йыл күбәйеүен етештергән аҙыҡ-түлектең сифатына талапсан булыуымда ла күрәм. Аҡса артынан ғына ҡыуһаң, башҡарған эш һөҙөмтәле булмай, шуға күрә һөт һауғанда ла, ҡаймаҡ айыртҡанда ла, май яҙғанда ла, иттән фарш үткәргәндә лә бар күңелемде биреп, сифатлы итеп эшләргә тырышам. Кешене бер алдаһаң, ул башҡаса һиңә килмәйәсәк, шулай уҡ был хаҡта таныштарына ла әйтәсәк, ә был, үҙ сиратында, потенциаль клиенттарымды юғалттым, тигән һүҙ. Шулай уҡ мин таҙалыҡҡа ла ҙур иғтибар бүләм, сөнки был да һатыу итеүҙә бик мөһим. Миңә мөрәжәғәт итеүселәрҙең күплеген тағы ла шуның менән аңлатыр инем: ниндәй генә тәмләткестәр ҡушып эшләнелһә лә, магазин аҙығы өйҙә етештерелгәнгә етмәй, сөнки ул экологик йәһәттән таҙа, оҙаҡ һаҡлау маҡсатында төрлө консерванттар ҡушылмаған һәм туҡлыҡлыраҡ та.

**Лилиә КИЛМӘТОВА.**

## ...Хужабикәләргә лә ҡулай

**Гәзиттәге "Әйҙә, аҡса эшләйек!" рубрикаһында сыҡҡан мәҡәләләрҙе ҡыҙыҡһынып уҡып барам һәм республика халҡының нисек булһа ла йүнен табып, аҡса эшләргә тырышыуын күреп һоҡланам. Нимә генә тимә, беҙҙә халыҡ барыбер яҡшы йәшәргә, ғаиләһенә лайыҡлы тормош булдырырға, балаларына белем бирергә ынтыла. Аҡса эшләү юлдары күп, Башҡортостаныбыҙ туристар өсөн дә ылыҡтырғыс төбәк.**

Беҙҙең Бөрйән яҡтары туристар өсөн айырыуса күркәм, сөнки бөтә донъяға билдәле Шүлгән мәмерйәһе, Ағиҙел яры буйындағы башҡа мәмерйәләр, ғорур тауҙар, ҡара урмандар беҙҙең районды ылыҡтырғыс итә. Мин Шүлгән мәмерйәһенә яҡын ауылдарҙың береһендә йәшәйем. Беҙҙең яҡтарҙа һәр осорҙа ла туристар күп, ләкин йәй айырыуса ҡыҙыу мәл. Нәҡ ошо миҙгел ваҡытында беҙҙең ауылдың уңған ҡатындары аҡса эшләп ҡала. Улар Шүлгән мәмерйәһен күрергә килгән меңәрләгән туристҡа өйҙә бешерелгән икмәк, башҡа тәм-том, буҙа эшләп, һөт-ҡаймаҡ алып барып һата. Бөгөн Шүлгән мәмерйәһен ҡарарға килеүселәргә бөтә уңайлыҡтар ҙа булдырылған: ҡунаҡханалар төҙөлгән, әллә күпме кафе эшләй, төрлө ассортиментлы аҙыҡ тәҡдим иткән магазиндар бихисап - барыһын да һатып алып була. Шулай ҙа ял итеүселәр ҙур теләк менән өй икмәген алып ашай, күпереп торған буҙа эсергә ярата, шулай уҡ талҡан һораусылар ҙа күп. Әлбиттә, был шөғөл кеҫә тултырып аҡса эшләрлек мөмкинлек бирмәй, шулай ҙа ғаилә бюджетына өҫтәмә килем килтереп, ҙур ярҙам күрһәтә. Шулай уҡ йылға буйлап ағып төшөүсе туристарға ла ошо уҡ хеҙмәтте күрһәтәбеҙ.

Хәҙер туризмды үҫтереү хаҡында һүҙ күп алып барыла. Барлыҡ изге ниәттәр ҙә тормошҡа ашырылып, төбәккә тағы ла күберәк турист йәлеп иткәндә, беҙҙең хужабикәләргә эш, шөғөл табылыр, тип өмөтләнәбеҙ.

**Гөлнара МӘХИЙӘНОВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, бер аҙ аҡса эшләр өсөн был юлдар барыһына ла ҡулай түгел. Шулай ҙа кем өсөндөр файҙалы мәғлүмәт булыр, тип уйлайбыҙ, сөнки ҡайһы берәүҙәр ғаиләһенән артҡан аҙыҡ-түлекте сығарып һатыуға, кемгәлер тәҡдим итергә ояла. Бөгөн баҙар заманында йәшәгәндә онотorға ярамай: кемдер һата, кемдер ала, һәм бында уңайһыҙланырлыҡ бер сәбәп тә юҡ.**

ӘЙҘӘ, ТАРТМАЙЫҠ!

# ТЫЙЫЛҒАН ТАТЛЫ, ТИП...

## тәмләп ҡараның да - етте шул

**"Тыйылған емеш татлы була", тиҙәр. Кешелек яралған мәлдә үк әсәбеҙ Һауа тыйылған емеште татып ҡарап, үҙе үк балаларына насар өлгө күрһәткән. Шулай уҡ был өлгөнән тыйылыу тигәндә лә ҡағиҙә итеп алған кеше үҙенә. Беҙҙең өләсәйҙәр, мәҫәлән, борон-борондан ҡаты ҡағиҙәләр, сиктәр эсендә йәшәгән. Һуңғы осорҙа был сиктәр асыла бирҙе һәм һылыуҙарыбыҙ ең һыҙғанып "тыйылған емештәрҙән" ауыҙ итә башланы. Эсергә, тәмәке көйрәтергә әүәҫләнде. Әммә был насар ғәҙәттәрҙең ҡатын-ҡыҙға төҫ түгел икәнен аңлағандар ҙа бар. Әле беҙ тәмәкене ташларға үҙендә көс тапҡан ҡатын-ҡыҙҙарға һүҙ бирәйек.**

**Лилиә, хужабикә, 27 йәш:** Тәмәке тартыуҙы ташлауыма бер йылдан ашыу ваҡыт үтте. Әйе, тәмәке тартҡанда үҙ-үҙеңә ышаныс тыуа, күңелгә еңеллек, шатлыҡ килгән кеүек. Әммә был шулай тойола ғына. Тартыуҙы ташлау өсөн оҙаҡ уйланып, йыйынып йөрөргә, ниндәйҙер сәбәптәр эҙләргә кәрәкмәй, буласаҡ балаңдың һаулығын ҡайғыртыу ҙа етә. Сөнки тәмәке тартҡан әсәнең балаһы тыумыштан аллергия, астманың ауыр формаһы менән ауырырға мөмкин. Шуны ла әйтеп китмәй булмаҫ: тәмәке тартмай башлауымдың өсөнсө көнөнә үк ашаған аҙығым тәмләнде, тағы дүрт көндән тындарым иркенәйҙе, алты көндән иртән йоҡонан торғанда башым ауыртмай ине, бер аҙнанан бөтә спорт төрҙәре менән шөғөлләнгем килә башланы. Ташып торған энергиямды фитнес-клубтарҙа, йога, яраткан эшем менән шөғөлләнеүгә йүнәлттем. Тәмәке тартҡы килеп киткән минуттар була, ундай саҡта кәнфит һурам, көнбағыш сиртәм, емеш-еләк ашайым. Ошонон менән бәйле, тәмәке ташлаған кеше һимерә, тигән ялған фекерҙе лә фашлағым килә. Эш менән булып, энергияңды яҡшыға йүнәлтһәң, һимеҙлек янамай ул.

**Рита, штукатур-маляр, 30 йәш:** Минең тәмәке тартыу буйынса 14 йыл стажым бар. Сибай ҡалаһына уҡырға килгәс, башҡаларҙан айырылып тормайым, тип, тәүге тапҡыр тәмәке ҡапҡайным. Бергә тәмәке көйрәтеп йөрөгән дуҫтарымдың күбеһе әллә ҡасан уҡ был ғәҙәттәрен ташланы. Мин тәмәкенән ике аҙна элек кенә баш тарттым. Сәбәбе - үҫеп килгән ҡыҙыма насар өлгө күрһәтергә теләмәүем. Ул минең тәмәке тартыуымды күрҙе, беләм. Артабан да был насар ғәҙәтемде дауам итһәм, мин киләсәктә ҡыҙыма "Тәмәке тартма" тип әйтә алмаясаҡмын. Элек мине лә әсәйем "Тартма, эсмә, юғиһә, туҡмайым, шулайтам, былайтам", тип киҫәтеп үҫтерҙе. Ә балалар, үсмерҙәр тыйылғандың киреһен эшләй бит инде ул. Мин инде баламды ҡурҡытып түгел, ә тәмәкенең зыяны тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләп үҫтерәсәкмен. Тәмәке һаулыҡҡа зыян килтереп кенә ҡалмай, кеҫәгә лә һуға. Айына 700 һум аҡса тәмәке алыуға китә. Өйрәнгән ғәҙәттән баш тартыуы ауыр. Ихтыяр көсө, теләк кәрәк. Теләгем бар, көсөмдән килер, тип өмөтләнәм.

**Айгөл, студент, 20 йәш:** Тәмәкене 3-4 йыл дауамында тарттым. Уға ылығып китеүемдең сәбәбе дуҫ ҡыҙҙарымдың: "Һин дә тартып ҡара, оҡшаясаҡ. Текәлек бит был!"- тип кәңәш итеүе, улар араһында бер үҙем "ала ҡарға" булырға теләмәүҙән булғандыр. Тәмәкенең ылыҡтырыу көсө ныҡ зур. Был насар ғәҙәттән мин йыл ярым элек баш тарттым. Һөйгәнем бик унаған егет, ул эсмәй ҙә, тәмәке лә тартмай, мине лә өгөтләр урында өгөтләп, ҡурҡытыр урында ҡурҡытып тигәндәй, дөрөҫ юлға баҫтырҙы. Төрлө мөйөштәрҙә ҡасып-боҫоп, йә иһә асыҡтан-асыҡ тәмәке көйрәтеп торған ҡыҙҙарҙы, йәштәштәремде күрһәм, хәҙер ытырғанып ҡуям. Әгәр ҙә егетем булмаһа, мин дә шулайтып йөрөр инем, тешемде һарғайтып, ауыҙымдан һаҫыҡ еҫ аңҡытып. Мин тәмәкенән ҡапыл ғына баш тарта алманым, яйлап кәметеп, ике ай эсендә ташланым. Баштараҡ ҡулым ҡалтырап, шул тиклем ныҡ тәмәке тартҡым килде. Ә хәҙер еҫенән дә башым ауырта башлай. Әйтергә кәрәк, башҡорт ҡыҙҙары ҡулында тәмәке бер ниндәй сиктәргә һыймай торған күренеш икән. Беҙҙең мөләйемлегебеҙҙе, сафлығыбыҙҙы юҡҡа сығара, рухыбыҙҙы баҫа бит ул тәмәке. Тәмәкенән баш тартайыҡ, башҡорт һылыуҙары!

**Камилә ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, ИЗГЕЛЕК ҠЫЛАЙЫҠ!

# ИГЕЛЕКҺЕҘҘӘРГӘ...

## һабаҡ бирә йөрөйөк шулай



Һигеҙенсе март иртәһе. Будильник шылтыраны, тик йырын башлап өлгөрмәҫ элек үк минең бармаҡ аҫтында тынып ҡалды. Утты тоҡандырмай, шым ғына тороп, кейенеп, баҙарға сығып киттем.

Һауа торошона ҡарап, урамға яҙ килгән, тип әйтеп булмай ине. Һалҡын ел куртка иҙеүҙәре аша семетеп алырға ғына тора. Яғамды юғарыраҡ күтәреп, баҙарға яҡынлаштым. Һигеҙенсе мартта ҡатыныма рауза гөлдәре түгел, тик яҙ сәскәләре генә бүләк итермен, тигән ниәтемде тормошҡа ашырырға ине...

Баҙарға килеп еттем. Баҙар майҙанында бер генә урында бер кәрзин матур яҙ сәскәләре ултыра. Мимозалар. Шуларға ынтылдым.

- Һатыусыһы кем?- тип һорайым.

- Улым, саҡ ҡына көтөп тор инде, хәҙер килә һатыусыһы. Оҙаҡҡа китмәне, - тип яуап бирҙе тоҙло ҡыяр менән һатыу иткән ҡатын. Мин ситкәрәк барып баҫтым да, ҡатыным һәм ҡыҙымдың мимозаларға нисек шатланасағын күҙ алдыма килтереп, йылмайып ҡуйҙым. Ҡаршымда бер ҡарт баҫып тора. Хәҙер килеп, иғтибарымды уның ҡиәфәтендә нимә йәлеп итеүен аныҡ ҡына иҫемә төшөрә лә алмайым. Өҫтөндә 1965 йыл фасонындағы, ямалып бөткән, әммә тап-таҙа плащ. Шул тиклем иҫкергән, ләкин ентекләп үтекләнгән салбар. Аяғындағы ботинкалар ялтыратҡансы таҙартылған, әммә был уның артыҡ ныҡ иҫке икәнен барыбер йәшерә алмай. Бер ботинкаһының табаны тимер сыбыҡ менән уратып бәйләп ҡуйылған. Плащ аҫтынан күренеп ҡалған күлдәге лә таҙа. Йөҙө ҡартлыҡ һырҙары менән ҡапланған. Тик күҙ ҡарашына ғына ниндәйҙер ҡаҡшамаҫ ғорурлыҡ осҡоно. Һалҡын елгә елберләп кенә торған плащының еңенән сығып торған ҡулдары өшөүҙән күгәреп бөткән. Әммә ҡарт түҙемле генә көтөп тороуын белә. Шул саҡ тамағыма ниндәйҙер әсе төйөр килеп тығылды. Оҙаҡ ҡына күҙәтеп тороп, ҡарттың эскесе йә асарбаҡ түгел икәнен аңлап өлгөргәйнем инде. Фәҡирлектең сигенә килеп төртөлгән бабай үҙ хәленән үҙе ояла-ны күренеп тора.

Ниһәйәт, һатыусы килеп етте. Бабай уңайһыҙланып ҡына уның ҡаршыһына барып баҫты. Һыуыҡтан дер ҡалтырап:

- Хужабикә, бер ботаҡ мимозаң күпме тора?- тип өндәште.

- Ә, алкаш! Һоранырға тораһыңмы, яҡшы саҡта ҡас бынан, йә мин һине... - тип ҡысҡырҙы ҡатын.

Ҡарттың күҙҙәре йәшләнеп китте. Уңайһыҙланды.

- Хужабикә, сәскәндең хаҡын ғына әйт инде, тик ҡысҡырма берүк...- ҡарт, аҡсам бар, тигәнде аңғартырға теләгәндәй, ҡулдарын кеҫәһенә тыҡты.

- Ярай, алкаш, һинең өсөн бер ботағы 5 һум,- тине һатыусы аҫтыртын ғына көләмһерәп.

Бабай ҡулдарын кеҫәһенән сығарҙы.

- Хужабикә, минең аҡсам өс һум ғына, бәлки, шуға бер бәләкәйерәк ботаҡ табып бирерһең?

Һатыусы кәрзинендә оҙаҡ ҡына ҡаҙынғандан һуң, ботағы уртаһынан һынған бер сәскә килтереп сығарҙы ла:

- Мә, тот, алкаш! Алкаш бисәнә алып ҡайтып бүләк ит, әйҙә,- тип, мыҫҡыллап көлдө.

Һыуыҡтан күгәреп бөткән ҡулдар һынған ботаҡты турайтырға маташты. Шул саҡта мин бабайҙың күҙҙәре йәшләнгәнен күреп ҡалдым да, түҙемлегемде юйып, һатыусыға ҡысҡырҙым:

- Нишләйһең һин, ә?!

Минең күҙ ҡарашымдан ҡурҡыпмы, ҡатындың йөҙө ағарып китте. Бер ни ҙә өндәшә алмай, аптырап ҡарап ҡатты был. Шул саҡ ҡартты әләктереп алдым да, сәскә һатыусының ҡаршыһына алып барып баҫтырҙым:

- Тиҙ бул, әйт! Бер кәрзин сәскәң күпме тора?

- Ә...ә... Белмәйем...

- Һуңғы тапҡыр яҡшылап һорайым: бер кәрзин сәскәңде күпмегә бирәһең?

- Моғайын... 500 һумдыр,- тип яуапланы һатыусы ҡабаланып.

Аҡсаны һатыусының аяҡ аҫтына атып бәрҙем дә, аптырап ҡалған ҡартҡа сәскәле кәрзинде һуҙҙым:

- Ал, ағай, ҡатыныңды ҡайтып ҡотла!

Ҡарт өнһөҙ генә илап ебәрҙе. Минең дә күҙҙәргә йәш төйөлдө. Һуҙылған кәрзинде бабай алырға теләмәне, уны бер ҡулы менән минә табан этәрҙе лә, икенсе ҡулы менән үҙе һатып алған һыныҡ ботаҡлы сәскәнән ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫты.

- Ярай, әйҙә, бергә киттек,- тинем. Бер-беребеҙгә өндәшмәй генә, мин бер кәрзин сәскәләр күтәреп, ул бер бөртөк сәскәнән ҡосоп, баҙарҙан сыҡтыҡ. Юл ыңғайында ҡартты аҙыҡ-түлек магазинына алып индем. Торт, шарап һатып алдым. Шунан ҡартҡа ипләп кенә аңлатырға тотондом.

- Ағай, ишетәһеңме, минең өсөн был сәскәләргә киткән 500 һум йәл түгел. Мин эшләйем, аҡса табам. Ә һинә бөгөн ҡатыныңың янына ботағы һынған сәскә менән ҡайтырға ярамай, байрам бит. Ҡаршылашма, зинһар, ошо торт, шарапты ла ал. Мә, бер кәрзин сәскә менән ҡайтып ҡыуандыр ҡатыныңды.

Ҡарт тағы ла илап ебәрҙе. Күҙ йәштәре бите буйлап плащына тамды... Мин был күренешкә оҙаҡ түҙеп тора алманым. Үҙем илар хәлгә етеп, бабайҙың ҡулдарына сәскә, шарап һәм тортты тотторҙом да, күҙҙәремде йәшереп, сығыу яғына ыңғайланым.

- Беҙ... Беҙ 45 йыл бергә... Ул ауырып китте... Бүләкһеҙ ҡалдыра алманым шул, - тип шыбырланы ҡарт. - Рәхмәт инде һинә...

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ӘСӘЙ БУЛЫУҘЫ...

## иртәгәгә ҡалдырма

**Ҡыҙ бала бәләкәйҙән үҙенең әсәһенә ҡарап, ҡурсаҡтар уйнап, әсәй булырға хыялланып үҫә. Быны мин үҙ тәжрибәмдән һәм күҙәтеүҙәремдән сығып әйтәм.**

Мәҫәлән, үҙем бәләкәй саҡта бер юлы һигеҙ-туғыҙ ҡурсаҡ менән уйнай инем. Уларға әсәй булған булып, яратам йә шелтәләйем, магазиндан матур күлдәктәр, тәмле кәнфиттәр алып ҡайтып һыйлаған булып ҡыланам. Баҡтиһәң, бына шулай уйнай-уйнай үҙемдә әсәлеккә әҙерләнгәнмен икән. Шуға ла ҡыҙ балаға бәләкәйҙән, һин буласаҡ әсәй, тип үҫтерергә кәрәк.

Халыҡ бушҡа ғына, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, тип әйтмәй. Башҡорт дәүләт медицина университетын тамамлағас, фәнни эшкә тотонғайным. Ана шул бала саҡтан һалынған әсәй булырға тигән хыялым мине ваҡытында ғаилә ҡороуға этәрҙе. Хәҙер инде ике балам бар. Һуңғараҡ өлгөрөрмөн, тип, ошо бәхеттән үҙемде мәхрүм итеүем дә бар ине бит, был турала уйлаһам, йөрәгем өшөп китә. Шулай ҙа өс-дүрт йыл үҙемде аямай эшләнем, туғыҙҙан туғыҙға тиклем эш урынында ултырырға тура килә ине. Табип булыу, унан бәләкәй генә булһа ла коллективты етәкләү, башҡа йөмәғәт эштәре күп ваҡыт, көс һәм энергия талап итә. Тәүге балам тыуғас, өс айлыҡ улымды ирем һәм әсәйемә ҡалдырып, кире эшкә сыҡтым. Икенсе сабыйымды ҡулыма алғас ҡына был хатам өсөн үкенеп, бала үҫкән осорҙоң һәр минутын күреү ни тиклем әһәмиәтле икәнен аңланым. Бер ниндәй исемдәр ҙә, дәрәжәләр ҙә әсәй булыуҙың ләззәтен алыштыра алмай икән. Әгәр ҙә өйөңдә һине сабыйҙарың көтөп ултырмаһа, ул эшеңдән ниндәй кинәнес алырға мөмкин! Киләсәк бөгөн һәм беҙҙән - әсәйҙәрҙән башлана икәнен онотмайыҡ. Әйҙәгеҙ, иң тәүҙә яҡшы әсәй булырға ынтылайыҡ!

**Хәлиҙә ҒӘЙФУЛЛИНА,**
**Әбйәлил районының**
**И. Һиҙиәтов исемендәге хоспис мөдире.**

ӘЙҘӘ, ЭШҠЫУАР БУЛАЙЫҠ!

# ЙӨК АТЫНА ӘЙЛӘНМӘ...

## әммә булдыра алғанды атҡар

**Элегерәк эшҡыуарлыҡ башлыса ир-егеттәр эше тип ҡаралһа, бөгөнгө көндә үҙ эшен булдырған гүзәл заттар күберәк тә хатта. Улар ғаиләһен дә ҡарай, хәстәрлекле әсәй, уңған хужабикә булырға ла өлгөрә, эшҡыуарлыкта ла бейек үрҙәргә күтәрелә. Бындай миҫалдар бихисап. Әбйәлил районы Күсем ауылынан нәҡ ошондай уңышлы эшҡыуар, өс бала тәрбиәләүсе әсә Сәбилә ЗӘЙНУЛЛИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**



### Тормошта барыһы ла һәйбәткә

Бер эш тә, ваҡиға ла буштан-бушҡа барлыҡҡа килмәй. Тормошта барыһы ла һинә һәйбәт булһын өсөн эшләнә, уның һөҙөмтәһе генә төрлөсә булыуы мөмкин. Шуға күрә бер осраҡта ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, башлаған юлыңдан ситкә тайпылмай, яҡшы һөҙөмтәгә табан, алға атлау мөһим. Был хәҡиҡәтте мин китаптан уҡып йәки һауанан алып һөйләмәйем, ә үҙемдең тормош тәжрибәмдән сығып әйтәм. Мәктәпте тамамлағандан һуң, Сибай педагогия колледжында уҡып, хеҙмәт уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштереп, мәктәптә уңышлы ғына эшләп йөрөгәндә, ҡыҫҡартыуға эләктем. Был осраҡта кемдер бала тәрбиәләп, ирен ҡарап, өйҙә генә ултырырға ла риза булыр ине, ләкин минең ташып торған көсөм, энергиям ниндәйҙер эшмәкәрлек талап итте. Ошо ваҡыт күңелдә "Әллә үҙ эшемде асып ҡарарғамы икән?" тигән уй тыуҙы һәм ул уй минә тынғы бирмәне. Етмәһә, уҡып алған һөнәрем күңелемә бик яҡын булғанлыҡтан, минең алда ниндәй эш төрөн һайлау мәсьәләһе лә тормай ине. Ләкин ниәтемде тиҙ генә тормошҡа ашырып булмаҫы, сөнки, беренсенән, был аҙымды эшләргә үҙемдең ояллыуым ҡамасаулаһа, икенсенән, эште уңышлы атҡара алырыма тормош иптәшем дә бик ышанып етмәне. Шулай итеп, үҙ эшемде асыу теләге күңелемдә һигеҙ йыл йөрөнө, өлгөрҙө, бешкә һәм, ниһайәт, өс йыл элек ул тормошҡа ашты. Бөгөнгө көндә сифатлы, матур һәм кәрәкле әйберҙәр тегеп һатам. Заказ биреүселәр һәм һатып алырға теләүселәрҙең күплеген иҫәпкә алғанда, үҙ эшемде асырға йөрьәт итеүем дөрөҫ аҙым булған, тигән фекерҙәмен.

### Эшҡыуарлыҡ - һәләтме, тормош талабымы?

Эшҡыуар булыу тәбиғәттән бирелгән һәләтме, йә булмаһа тормош талабы буйынса ғына атҡарылған уй-теләкме, тигән һорау тыуғаны бар миндә. Һәм төрлө күҙәтеү, уйланыуҙар аша "Эшҡыуарлыҡ - ул һәләттәр", тигән фекергә килдем, сөнки был эшкә тотонған һәр кемдең дә эше алға китмәй. Бында эш финанс ҡытлыҡҡа ла, төрлө киҫкен хәлдәр килеп тыуыуына йәки башҡа сәбәпкә лә бәйләнмәгән, сөнки кемдер йомарлап аҡса алып йөрөп тә, уңышҡа өлгәшә алмай, ә икенсе берәү юҡты бар итеп, үҙ эшен алға ебәрә.

Ләкин эшҡыуар булып китеү өсөн көслө теләктең һәм һәләттең генә лә етмәүе бар. Ниндәйҙер башланғыс ярҙам сағында ук юғалып ҡалмаһын өсөн уны йөпләп, һаҡлап, ҡурсалап тороусылар кәрәк. Үҙ эшемде асыу теләген тормошҡа ашырыуҙың башланғыс этабында ла, хәҙер ҙә мине аңлаған, кәңәштәре, аныҡ эштәре менән ярҙам иткән кешеләр менән осрашырға насип итте Хоҙай. Мөмкинлектән файҙаланып, "Киске Өфө" гәзите аша беҙҙең Әбйәлил районы хакимиәтенә, эшҡыуарҙар менән эшләүсе төрлө ойошма хеҙмәткәрҙәренә, мәшғүллек үҙәге етәкселегенә һәм һәр эшемә, уйыма ризалығын биреп, мине аңлап тороусы тормош иптәшемә оло рәхмәтемде белдерәм. Тормошта рәхмәтле була белеү кәрәк, шул саҡта ғына эштәрең көйлө, донъяң йәйле барасаҡ, тип уйлайым.

### Эшҡыуар - хәрәкәт итеүсе ул

Беҙҙең Әбйәлил районында халыҡ дәртле, тырыш, көслө, донъя ауырлығына баш эймәй, бәләкәй генә ҡыуанысты ла оло шатлыҡ итеп йәшәй белә. Айырыуса донъя бөтәйтеп, төйнәп-йыйып, матур ғаилә булдырып йәшәүсе йәштәрҙең күп булыуы ҡыуаныслы хәл. Шулай уҡ йәштәребеҙ араһында үҙ эшен асып, һәйбәт итеп эшләп йөрөүселәр ҙә бихисап. Нәҡ уларға әйтер һүҙем бар.

Тәү сиратта, эшҡыуарҙа үҙ эшен һөйөү, ҡыйыулыҡ кеүек сифаттар булырға тейеш, сөнки башҡарған эшеңде бар күңелдән яратып, бөтә нескәлеген белеп башҡарғанда ғына теләгән уңышҡа өлгәшеп була. Ә оялыу, бөгөн эшләр эште иртәгәгә ҡалдырыу кеүек сифаттар эшҡыуарҙы биҙәмәй. Уңышлы эшҡыуар сәбәләнмәй, ары-бире һуғылмай ғына тормоштоң төрлө ваҡиғаларын уҙғарып ебәрә белергә лә тейеш, сөнки ваҡыт барыһын да үҙ урынына ҡуя, тигеҙләй, теүәлләй һәм асыҡлай. Тик был барыһын да үҙ ағышына ҡуйып, көтөп ятыуҙы аңлатмай, ә бары тик баштан аша һикермәҫкә кәрәклегенә генә ишаралай. Шуға күрә, бөгөн йырып сыға алмаҫтай булып күренгән ваҡиғаны хәл итеү юлы иртәгә үҙенән-үҙе асылырға мөмкин. Түҙемле булырға кәрәк. Хоҙай ҙа беҙҙе нәҡ шулай өйрәтә. Шулай уҡ тота килеп һүҙгә килешеп, кешеләр менән үҙара мөнәсәбәт боҙорға ла ярамай һәм кемдер ҡатыраҡ ҡағылһа ла, уны күңелгә ауыр алмай, үткәреп ебәрергә тырышырға кәрәк, сөнки йөрәктә асыу һаҡлап, кенә тотоп йөрөү яҡшыға алып бармай. Эшҡыуарға планлаштыра белеү сифаты ла мотлаҡ, тип уйлайым, сөнки ул кешене ауаплылыҡҡа, тәртипкә өйрәтә, һәр бер эшкә етди ҡарарға өндәй. Шулай уҡ эштең уңышлы барыуы кешенең пунктуаль булыуына, әйткән һүҙендә тора белеүенә һәм профессионаллегенә лә тығыҙ бәйле. Тағы ла шуны әйткем килә: тормошта үтә лә ҡомһоҙ булырға ярамай, сөнки ул яҡшылыҡҡа алып бармай, ҙур байлыҡ килтермәй, ә кешене эстән "кимереүсе" ролен генә үтәй, ә күңел тыныслығы булмаһа, бер эш тә уңышлы булмаясаҡ.

Бөгөнгө көндә дәүләт тарафынан эшҡыуарлыҡҡа яңы тотонғандарға субсидиялар бүленеүе, шулай уҡ төрлө грант һәм лизингтар бирелеүе лә ошо тармаҡта тәүге аҙымдарҙы эшләргә һәм ҡурҡмаҫҡа мөмкинлек бирә. Тик дәүләт ярҙамы алыу тәүбурыстың береһе булырға тейеш түгел, сөнки "Кемдер миңә нимәләр бирергә тейеш" тип ятҡанда эштең алға китеүе икеле. Шулай ҙа кемдер ярҙам итергә теләк белдерһә, оялыу һәм тартынырығыҙҙы ситкә ҡуйып, ҙур рәхмәтле булып, ул ярҙамды алығыҙ, тип әйткем килә.

### Ҡатын-ҡыҙ - хужабикә генәме?

Бөгөнгө көндә, минеңсә, донъя йөгөн ир менән ҡатын бергә тартырға, тормош мәшәҡәттәрен бергә бүлергә һәм атҡарып сығырға тейеш, бары тик шул ваҡытта ғына ғаиләлә гармония, аңлашыусанлыҡ һәм татыулыҡ буласаҡ. Элеккке замандарҙағы кеүек, "Ҡатын-ҡыҙ - өй хужабикәһе" тигән иҫке ҡараштарҙы алға ҡуйып түгел, ә бөгөнгө заман ритмынан ҡалышмай, бергә атларға тырышырға кәрәк, сөнки был фекер бөгөнгө динамик, ашығыс, ҡатмарлы һәм шул ваҡытта һоҡланғыс та тормошта үҙ актуаллеген юғалтҡан, тип уйлайым. Ләкин ҡатын-ҡыҙ үҙен тик өй хужабикәһе генә булыуҙа күрһә, бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ, сөнки балаларға һәйбәт әсәй, иренә уңған ҡатын булыу ҙа ҙур көс һәм сыҙамлыҡ талап итә.

Әгәр ҙә инде ҡатын-ҡыҙ үҙендә тағы ла ҡайҙалыр эшләргә йәки үҙ эшен асырға көс, энергия таба икән, ни өсөн ул өйҙә генә ултырырға тейеш? Барһын, эшләһен, үҙенең һөнәрен, оҫталығын күрһәтһен, тигән ҡараштамын. Был хәҡиҡәтте бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙы яҡшы аңлай, ә ҡайһылары хатта уҙҙырып ебәрә һәм ғаиләнең төп ҡараусыһына әйләнә. Был да дөрөҫ түгел, сөнки гүзәл затыбыҙ йөк атына әйләнеп, үҙ нескәлеген, нәзәкәтлеген һәм матурлығын юғалтмаҫҡа тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәхет нимә ул тип һорайбыҙ йыш ҡына һәм уны ҡайҙалыр йыраҡ киңлегенән, күңел төпкөлөнән, киләсәктә йә булмаһа үткәндә эҙләйбеҙ. Һәм тапмайбыҙ... Ә уның яныбыҙҙа ғына икәнлеген аңларға ла, күрергә лә теләмәйбеҙ, буғай. Ғаиләлә балаларыңа яратҡан әсәй, иреңә уңған һәм һөйкөлө ҡатын булып, көндәрең күңелең яҡын эш менән уҙһа, тыныс һәм бәрәкәтле тормошта йәшәүеңде үҙе бәхет икәнлеген аңлау өсөн күп кәрәкмәй. Нәҡ ошо хәҡиҡәтте аңлаған Сәбилә Фәнил ҡыҙын бәхетлеләр рәтенә индермәү мөмкин түгел.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# АСЫЛЫБЫҘ - САЯЛЫҠМЫ?

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты:** Бала үҫтереү, ғаиләлә йылы мөхит тыуҙырыу һәр заман ҡатын-ҡыҙының төп бурысы булып ҡала килә. Нимә генә тимәһендәр, бөгөн дә шулай. Әлбиттә, карьера эшләү ҙә, юғары вазифаға өлгәшеү, ниндәйҙер башҡа үрҙәр яулау ҙа кәрәк. Әммә эргәндә балаларың булмаһа, яуланған үрҙәрҙең бөтә ҡиммәте, мәғәнәһе юҡҡа сыға, уларҙың кәрәге булмайҙыр. Ҡатын-ҡыҙ өсөн ысын бәхет килтергән берҙән-бер вазифа - ул тәбиғәттән бирелгән әсәлек вазифаһы, тип иҫәпләйем. Элек балаларҙың күп тыуыуын мин халыҡтың ауыл ерендә, тәбиғи мөхиттә йәшәгәненә бәйләйем. Ҡала ерендә күп балалы әсә булыу, бәлки, уңайлы ла түгелдер. Һәм шуға һылтаналар ҙа. Әммә был һылтаныу ғына. Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа бит. Ғаиләлә бала тыуһа, уйламаған ерҙән өйгә ишәйеп мал, байлыҡ килеп керә, ти ололар. Бала, ысынлап та, ғаиләгә ҡот, бәрәкәт, сафлыҡ өҫтәй, тип уйлайым. Мин үҙем өс ир бала әсәһе. Үҫеп килгән улдарым мине бәхетле итә. Уларҙың ҡыуанысы минең ҡыуанысҡа әүерелә. Улар кисергән шатлыҡ үҙемдекенә ҡарағанда ла минең өсөн гәзизерәк, татлыраҡ, күңелдә ул оҙайлыраҡ һаҡлана, дәрт биреп тора. Бөтә әсәләргә лә бындай тойғо таныштыр ул. Тимәк, ҡатын-ҡыҙҙың бәхете - уның балалары.

Элек башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары сая, ҡыйыу булған, тиҙәр. Быны тарихтан да беләбеҙ. Әммә, беҙҙең ҡатындар яуҙа йөрөгән, тимәк, бөгөн дә улар шулай сая булырға тейештәр, тигән фекерҙе таратыуға ҡаршымын. Хәҙер башҡорт ҡыҙҙарын шундай образда күрһәтеү, уларҙан "ирҡатын" яһау кәрәкмәйҙер. Аллаһы Тәғәлә ҡатын-ҡыҙға мөләйемлелек, нәзәкәтлелек, ягымлылыҡ кеүек сифаттар яратҡан. Мин, мәҫәлән, шундай булырға, шулай күренергә теләйем. Бәлки, элекке замандарҙа ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙан, ысынлап та, яугирлыҡ сифаттары талап ителгәндер. Һуңғы быуындарҙы ла хатта шулай үҫтерҙеләр бит. Йәнәһе лә, һин ир кеше кеүек көслө, батыр булырға тейешһең. Әммә барыбер үҙеңдә ҡатын-ҡыҙ асылын һаҡларға кәрәк, ә батырлыҡты бөгөн икенсе төрлө сағылдырырға була. Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда.

**Рубриканы Мөнир ИҠСАНОВ алып бара.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МЫЖЫҠ ҠАТЫН...

## уйҙырма ғына

■ Швейцария ғалимдары белдереүенсә, ғаилә союзы уңышлы булһын өсөн ир менән ҡатын ҡайһы бер критерийҙар буйынса тура килергә тейеш. Белгестәр фекеренсә, ҡатын ирҙең мәҙәни-социаль мөхитенә тап килергә һәм, иң мөһиме, унан күпкә аҡыллыраҡ булырға тейеш. Был осраҡта ғаиләнең бәхетле буласағы 20 процентҡа юғарыраҡ, ти Женева бизнес мәктәбе ғалимдары. Ҡатындың интеллектуаль мөмкинлектәре иренең интеллектынан 27 процентҡа юғарыраҡ булыуы, шулай уҡ ҡатындың юғары белемле булыуы, ә ирҙең булмауы - иң идеаль формула иҫәпләнә. "Бәхетле ғаиләләрҙә ҡатындың аҡыллыраҡ булырға тейешлеге дөрөҫ, сөнки тап ҡатындар мөнәсәбәттәр ландшафтының хис-тойғолар өлөшө өсөн яуаплы", - ти енестәр араһындағы мөнәсәбәттәр тураһындағы китаптар авторы Кейт Фиджес та.

■ Көн яҡшы үтһен өсөн, иртән яҡшы кәйефтә уяныуға кәрәк. Сөнки иртәнге тойғолар һинең көн дауамындағы кәйефеңде билдәләй ҙә инде. Уянғас та кирелеп-һуҙылып алығыҙ, был саҡта бәхет гормоны бүленәсәк, ә организм тынлыҡ торошонан хәрәкәт режимына күсәсәк. Бынан һуң шунда уҡ тороп, йыуынғас та бүлмә температураһы йылылығындағы бер стакан һыуға бал һалып эсергә кәрәк. Боронғо рецепт буйынса, балды һалҡын һыуға кистән үк болғап ҡуйырға була.

■ Һөйләшкән ваҡытта телефонды нисек тотоуға ҡарап, баш мейеһенең ҡайһы өлөшө өҫтөнлөк алыуы тураһында белергә мөмкин. Америка ғалимдары асыҡлауынса, кешеләрҙең 70 проценты телефонды "эшсе" ҡулына тотоп һөйләшә. Мәҫәлән, уң ҡуллыларҙа телмәр һәм тел өсөн яуаплы һул яҡ мейе ярымшары өҫтөнлөклө була. Ундайҙар ике ҡолағы ла бер төрлө ишетеүгә ҡарамаҫтан, йышыраҡ телефонды уң ҡолағына ҡуйып һөйләшә. Уң яҡ мейе ярымшары алдынғы булған кешеләр телефонды һул ҡолағы менән тыңлай. Был асыш кешенең баш мейеһендә телмәр үҙәген тикшереүҙәрҙе асыҡларға мөмкинлек бирә. Быға тиклем быны асыҡлау өсөн кешенең йоҡо артерияһына анестетик индереп, бер ярымшарҙы "һүндереп" тороу кәрәк ине.

■ Ғаиләлә ир кешенең янъялсы, эскесе булыуы ҡатын-ҡыҙҙы депрессияға индереүе ихтимал. Америка ғалимдары быны күптән раҫлаған да инде. Тикшеренеүҙәр тағы ла бер ҡыҙыҡлы фактты асыҡларға мөмкинлек биргән. Баҡтиһәң, ирҙәргә ҡатындарының ҡылыҡтары бер нисек тә тәьҫир итмәй икән. Миссури университеты ғалимдары белдереүенсә, ирҙәрҙең антисоциаль ҡылыҡтары шунда уҡ ҡатындарының күңел торошонда күренә. Ир үҙен ни тиклем агрессив тота, ваҡыт үтеү менән ҡатында депрессия ла шул тиклем тәрәнерәк сағылыш табасаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, ире позитив ҡарашлы булған ҡатындарҙа психологик тайпылыштар бөтөнләй күҙәтелмәй. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ысынлап та ҡатындың антисоциаль ҡылығы һәм ирҙең депрессияһы араһында бәйләнеш асыҡланмаған. Тимәк, тауыш ҡуптарып, ирен ир булараҡ "юҡҡа сығарыусы" мыжыҡ ҡатын образы бары тик миф ҡына булып ҡала. Ирҙәр депрессияға һирәк осраҡтарҙа, мәҫәлән, эшен йәки туғандарын юғалтҡанда ғына бирелеүе ихтимал, ти ғалимдар.

ӘРНЕҮҘӘР БАР...



# ЯҢҒЫҘЛЫҠ

## БАЛАМ АТАЙҺЫҘ ҮҪӘ

**Дүрт йәшлек улым менән "Йәш ғаилә" тигән конкурсты тамаша ҡылырға барғайныҡ. Конкурсанттарға бүләктәр бирә башлағайнылар, улым: "Әсәй, әгәр атай тапһаҡ, беҙгә лә ошолайтып бүләк бирерҙәрме?" - тип, бөтөн залға яңғыратып һорау бирҙе. Тирә-яҡтағыларҙың кемелер көлөп ҡуйҙы, кемелер аптырап күҙ һирпте.**

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ирем менән айырылышырға тура килде шул. Сәбәптәре билдәле: эскелек, булдыҡһыҙлыҡ, ҡул күтәреү. Кемдер: "Яҡшы ҡатындан ире сығып китмәй", - тип әйтер. Кемдер:"Ҡатын-ҡыҙ бигерәк түҙемһеҙ хәҙер",- тип ғәйепләү ташлар. Ләкин ҡатынына, балаһына ҡарағанда, эскелекте өҫтөн ҡуйған иргә нисек түҙеп йәшәмәк кәрәк! Әсәй кеше иң тәүҙә бындай атайҙың балаһына ниндәй өлгө бирәсәге тураһында ла уйлай. Шуға күрә айырылышыуҙа ҡатындарҙы ғына ғәйепләргә ярамай.

Баламды балалар баҡсаһына йөрөтәм, төркөмдәге йәш әсәләрҙең яртыһы балаларын яңғыҙы ҡарай. 23 кенә йәшлек әсәләр, балаларын ҡарайым, тип, бер юлы 3 урында эшләй, аҡса табырға тырыша, йән тынысһығын диндә, намаҙҙа тапҡандары ла бар. Төҫкә сибәр, йәш, аҡыллы был ҡатындарға, әлбиттә, ир-егеттәрҙең күҙе төшмәй ҡалмай, ләкин уларҙың балалы булыуын ишетеү менән йөҙ бора һалалар. Шуға ла йәшләй генә ирһеҙ ҡалған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күп осраҡта яңғыҙы ҡартая.

..."Йәш ғаилә" конкурсы барғанда улымдың ҡапыл атай тураһында һорау биреүе, әлбиттә, йөрәк ярамды ҡуҙғатты. Сәхнәләге булмыштарынан тыныслыҡ, олпатлыҡ һәм ышаныс бөркөлөп торған атайҙар, ғаилә усағын күҙ ҡараһылай һаҡлаған әсәйҙәргә үҙем һоҡланһам, улым, моғайын, ошо тулы ғаилә усағында ирәйеп, иркәләнеп йәшәгән, үҙенең бәхетен сәхнәләге сығыштарында сағылдырған балаларға ҡарап ултырып, күҙе ҡыҙып киткәндер.

Әлбиттә, яңғыҙ тәрбиәләһәм дә, улыма атайһыҙлыҡты тойҙормаҫҡа тырышам. Ә шулай ҙа... Нимә әйтергә теләйем: башҡаларға ғибрәт өсөн, ир-егеттәр уйланһын өсөн балаларын яңғыҙ тәрбиәләгән әсәйҙәр конкурсы ла уҙғарырға кәрәк ине ул. Юҡһа, беҙҙең кеүек яңғыҙ әсәләргә, яңғыҙ ҡалыуҙарына үҙҙәре ғәйепле, тип ҡарайҙар. Был бик ҙур мәсьәлә, һәм уға йәмғәселектең иғтибарын йәлеп итергә кәрәк. Башҡалар ни уйлай икән ошо хаҡта?

**Миләүшә ЙӘНӘБИЕВА.**

## БАЛАМ КҮҢЕЛЕ - ДАЛАЛА

**Баш баламды, өлкән улымды бөтөн күңел йылымды биреп, күҙ нурымдай күреп үҫтерҙем. Өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһын, башҡаларҙан кәм булып үҫмәһен өсөн ал-ял белмәй эшләнем, ун биш йыл буйы отпускымды ла алманым хатта. Әммә ҡартайған көнөмдә уны көтөп ала алмай ҡаңғырам.**

Тәрбиәмдең ҡайһы төңгәлендә хаталандым һуң? Ниңә күңеле ҡаты, бәғере таш балаға әүерелде? Һикһәнгә етеп барған әсәйемдең өйө йылымы, мохтажлыҡ кисермәйме, дарыуҙарға аҡсаһы етәме, тип ниңә уйламай икән? Мохтажлыҡ кисермәйем, әлбиттә, әммә баламдың тауышын, бер генә йылы һүҙен ишетергә зар-интизар булып ултырам. Ә бит өйләнгәнгә тиклем ул бындай бала түгел ине. Өйләнгәс, үҙе атай булғас, ҡырыҫланды, әсәйҙе лә, туғандарҙы ла онотто. Кемдер:"Үҙегеҙ шундай өлгө биргәнһегеҙҙер",- тиер. Һис юҡ. Атайҙары ла ғаиләһе өсөн йәнен бирергә әҙер кеше булды. Ҡулынан килмәгән эше булманы, ағасҡа тотонһа ла, тимергә тотонһа ла - барыһын да булдырҙы. Урманға сыҡһа - ул һунарсы, йылға буйында - ул балыҡсы, баҡсабыҙ тулы умарта, һарай тулы мал-тыуар. Ҡыштың оҙон төндәре ау бәйләп, мурҙа үреп үткәрер ине. Ғүмере генә бик ҡыҫҡа булды, ауыр сирҙән ҡотола алмай, гүр әйәһе булып ҡалды, ауыр тупраҡтары еңел булһын.

Башҡа балаларым да башлы-күҙле булып, үҙ донъяларын матур итеп көтәләр, балалар үҫтерәләр. Улары төп йортҡа юлды һыуындырмай, ауырлыҡтарҙы ла, ҡайғыларымды ла бергә күтәрешәләр. Бала ҡайғыларын башҡаларға күрһәтмәһен Хоҙай - ике балам ҡарағай буйлы булып үҫеп еткәс кенә фажиғәле үлеп китте. Көн менән төнөм буталды, был донъяла йәшәүемдең йәме бөткәндәй булды. Ҡайғыһына ҡушып сабырлыҡтар ҙа бирәләр Хоҙай. Миңә лә сабырлыҡ насип итте. Әммә ҡалған балаларым өсөн ҡурҡып ҡалтыраныуым бик оҙаҡ дауам итте. Ошондай саҡта минең һәм башҡа балаларымдың таянысы булыр өлкән улым ғына эргәмдә булманы һәм юҡ. Ә бит ул иң ҡәҙерлеһе, иң яҡыны ине балаларымдың.

Инде был ҡышты ла үткәреп, йәйгә аяҡ баҫырға торғанда өлкән улымды күрә алырмынмы, юҡмы тип өҙгөләнә йөрәгем.

Күҙҙәрем тулы йәш, йөрәгемдә ауыр таш. Их, улым! Үҙеңдән кесе туғаныңа атай урынына ҡалғанһың, әммә бындай яуаплылыҡты тоймай йәшәйһең. Туғандарҙың булыуы ҙур бәхет икәнлеген ҡасан аңларһың? Байлыҡты, хөр йәшәүҙе үҙ әсәңә, туғандарыңа алыштырҙың. Байлыҡ та, белгән вазифалар ҙа ваҡытлыса бит ул. Был донъяла бөрәү ҙә мәңгелек түгел. Бәлки, һин дә ологайған көнөңдә мине, әсәйеңде, күргең, һөйләшкең килер, тик мин генә булмам... Йоҡоһоҙ төндәрҙең бик оҙон икәнлеген, күңеле тыныс булмаған, балаларын көткән әсәйҙәр генә аңлайҙыр. Быны мин дә баш балама көн-төн һаулыҡ, ғүмер, тәүфиҡ теләй-теләй йоҡоһоҙ төндәр үткәрәм. Минең был хатымда яҙылған юлдар барлыҡ балаларға оран булып ишетелһен ине: әсәйҙәргә йышыраҡ ҡайтығыҙ!

**ӘСӘЙ.**

## ҠАРТТАРЫБЫҘ КҮТӘРӘ

**Яңғыҙлыҡ - ул үҙәк өҙөрлөк, күңел әрнетерлек, йөрәк һыҙлатырлыҡ үтә лә ауыр нәмә. Тик көслө рухлылар ғына уның ҡаты һынауҙарына сыҙай алалыр.**

Яңғыҙлыҡ тураһында уйлаһам, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын үҙ башынан кисереп, ошо аяуһыҙ һуғыш арҡаһында ирҙәрен мәңгелеккә юғалтып, донъяның ауыр йөгөн яңғыҙы ғына тартҡан көслө, эшсән, сабыр йәнле тол ҡатындар күҙ алдына килә. Эйе, һуғыш миллиондарҙы ауыр яҙмышҡа дусар итте. Бер-береһен һөйгән йәрҙәрҙе айырҙы.

Бөгөнгө көндә лә бар яңғыҙаҡтар ауылдарҙа. Мәҫәлән, беҙҙең Ғафури районы Туғай ауылында пенсия йәшендәге 70 ҡатын-ҡыҙ булһа, шуларҙың тик 25-е генә үҙ иштәре менән йәшәй. 45-е яңғыҙ (тол ҡалған) әсәләр. Уларҙың ҡайһы берҙәре өйләнмәгән, йә ғаиләһенән айырылып әсә йортона килеп һыйынған улдары менән донъя көтә. Был яңғыҙҙар үҙ яҙмыштарына күнегеп йәшәргә мәжбүр.

Йәш ҡатын-ҡыҙҙар араһында үҙ иштәре менән яртылаш ҡына йәшәгәндәр күбәйҙе хәҙер. Үҙебеҙҙә эш булмағас, күпме ир-егет вахта ысулы менән Себер яҡтарында йә башҡа урында эшләй. Әлбиттә, эшләгәс, аҡсаһын мул алалар, әммә шәхси тормоштары бәхетле булмағас, йәғни ғүмерҙәренең күпселек өлөшө яңғыҙлыҡта үткәс, аҡса ғына бәхет килтерә аламы икән уларға? Бала тәрбиәләүе лә еңел түгел бит яңғыҙ әсәләргә.

Беҙ, хәҙерге өлкән йәштәгеләр, һуғыш осоро балалары, барлыҡ ғазап, аслыҡтарҙы күреп, ауырлыҡтарҙа сынығып, эшсән, түҙем булып үҫтек. Ә бына бөгөнгө йәштәр, йәғни беҙҙең балалар, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ тормош һынауҙарына тиҙ бирешеүсән. Шуға ла улар өсөн, бигерәк тә ауылда үҫеп, ҡалаға эшкә киткән балалар өсөн борсолабыҙ. Ә Себер яҡтарында эшләгәндәрен йылына бер тапҡыр һағынып көтөп алабыҙ ҙа, бик тиҙ уҙып киткән һанаулы ялдарынан һуң ҡабат оҙатабыҙ. Бындай саҡта тормош, әйтерһең дә, көтөүҙән һәм оҙатыуҙан ғына торған кеүек.

Ауылыбыҙ ҡартайҙы. Йәш ғаиләләр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Мәктәп һәм балалар баҡсаһынан башҡа эш урыны юҡ. Клуб, китапхана йылылыҡ бирелмәй. Ошо сәбәпле ауыл элекке күркәм сифаттарын юғалта бара. Күңел асыу уйындары, концерттар булғаны юҡ. Гармун моңдары ла ишетелмәй хәҙер. Ауылда элекке кеүек өмәләр уҙғарыу ҙа онотолдо. Түләүле эшкә генә йөрөй хәҙер кеше. Әҙәм балаһының күңеле ярлыланды һымаҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, күршенең хәлен белешеп йәшәү кеүек матур сифаттар күнелдән юйыла барғандай. Үҙ-үҙенә бикләнеп йәшәй күптәр (ҡалала бигерәк тә). Көҙгө-ҡышҡы оҙон кистәрҙә кис ултырып ҡул эштәре менән булыу, шатлыҡ-һағыштарҙы уртаҡлашыу ғәҙәте бар ине. Хәҙер кеше ҡайғыны төштән һуң тип ҡарайбыҙ шикелле.

Кеше ғүмере мәңгелек түгел, ғүмер юлын матур, файҙалы итеп ғорур уҙа белергә кәрәк. Беҙ, ауыл балалары, тәбиғәттән көс алып йәшәйбеҙ, тормошто яратабыҙ, шуға ла яңғыҙлыҡ хисе беҙҙең ихтыярҙы әллә ни һындыра алмай, шөкөр. Тик балаларыбыҙ яңғыҙлыҡты тоймаһын йә уны күтәрә белһен, тим.

*Иртән тороп тышҡа сыҡһам,*
*Уралам томандарға.*
*Хоҙайым сабырлыҡ бирһен*
*Яңғыҙы ҡалғандарға.*

**Әминә ВАХИТОВА.**
**Ғафури районы Туғай ауылы.**

✓ *Медитация һәм тын алыуҙы контроллəү ысулдары иҫәбенә йогалар түҙгеһеҙ физик ауыртыныуға ла сыҙай һәм оҙаҡ ваҡыт ашамай, йоҡламай йәшәй ала. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙа шундай ҡеүәт йәшеренгән.*



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДИНДАР ИРҘЕҢ ҠАТЫНЫ...

## ҡалай бәхетле!



**Ислам диненә арналған китаптарҙа ирҙәрҙең ҡатындарына ҡарата бурыстары ентекле тасуирлана. Мәҫәлән, диндар Ибраһим Хаккы Эрзрумлу тигән автор йыш ҡына ағаларына ирҙәрҙең үҙ ҡатындарына ҡарата мөғәмәләһе буйынса мотлаҡ үтәлергә тейеш шарттар тураһында кәңәштәр бирер булған. Бына ниндәй кәңәштәр улар:**

- Ир кеше хәләл ефетенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә һәм шәфҡәтле булырға тейеш.

- Өйгә килеп инеү менән ир кеше ҡатынын "Әссәләмәғәләйкүм" тип сәләмләһен һәм уның хәл-әхүәлен һорашһын.

- Ҡатыныңдың күтәренке кәйеф менән йөрөүен күрһәң, аулаҡ урын табып, сәсенән һыйпап, бер аҙ шаярып, ҡосаҡлап үбеп алырға кәрәк.

- Йәмәғәтеңдең кәйефе булмағанда аулаҡ урынға алып сығып, уны яратыуың хаҡында әйтергә кәрәк. Ир кеше ҡатынын аңларға, уны тынысландырырға, яҡшы һүҙҙәр менән йыуатырға тейеш.

-Ир кеше ҡатынының теләгең үтәй алмаһа ла, уны тынысландырып, был үтенесте тормошҡа ашырып ҡарарға вәғәҙә итергә тейеш. Балалар тәрбиәләгәндә лә ир кеше хәләл ефетенә ярҙам күрһәтергә бурыслы, сөнки бәләкәй балалар йыш ҡына көнө-төнө илап, әсәләрен йонсота. Был осраҡта балаһын имеҙеүсе ҡатынға ярҙам итеүсегә Аллаһы Тәғәлә үҙе ярҙам ҡулы һуҙыр.

- Ир ҡатынына уңайлы һәм лайыҡлы кейем кейҙерергә тейеш. Өйҙә ул күңеленә ятҡан һәр төрлө матур кейемдә йөрөй ала, әммә урамға сыҡҡанда мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына хас итәғәтле кейем кейергә бурыслы.

- Ир кеше ҡатынын һаулығына зыян килтермәгән сифатлы ризыҡ менән туҡландырырға, ғөмүмән, ғаиләһен яҡшы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙе мөһим бурысы тип һанарға тейеш.

- Ир һаранланмаҫҡа, әммә шул уҡ ваҡытта аҡсаһын артыҡ тәләфләмәҫкә лә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ғаиләһен тәьмин итеүгә аҡса түккән ирҙәрҙе бүләкләй, әммә саҙаҡа биреүселәргә сауабы күберәк булыр.

- Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла өйгә тәмлекәстәр алып ҡайтырға кәрәк, уларҙы яңғыҙ ултырып ашарға ярамай. Ғаилә менән бергә ултырып тамаҡ туйҙырыу изге эш. Иң мөһиме, ғаиләгә тик хәләл көс менән генә эшләп табылған мөлкәтте тотоноу кәрәк.

- Ҡатын-ҡыҙ күңеле үтә нескә, рәнйеүсән. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙар араһында бер-береһенә зыян килтереүселәр күп. Ғаилә ҡороуҙың тәүге йылында йәштәр бик иғтибарлы булырға тейеш: ир кеше әсәһе, апайы, йә бүтән ҡатындарҙың хәләл ефетенә ҡарата булған тәнҡитенә бирелмәҫкә, үҙе лә был эшкә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Башҡаларҙың һүҙен тыңлап, ҡатыныңды рәнйетеүҙән тыйылырға кәрәк. Шулай уҡ ҡатынының ҡәйнәһен, ҡайынбикәләрен насарлауына юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ғаилә ҡороусы йәштәр икеһененең дә ата-әсәһенә ихтирамлы, итәғәтле мөғәмәләлә булырға бурыслы. Сөнки ололар фатихаһы уларға бик кәрәк.

- Ҡылынған хаталар өсөн бер көндән артыҡ үсегеп йөрөргә ярамай.

- Ҡатыныңдың мыжыҡлығын йомшаҡ ҡабул итергә кәрәк. Сөнки Аллаһы Тәғәлә уларҙы ирҙәр ҡарамағына тапшырған.

- Ҡатыныңдың холҡо насар яҡҡа үҙгәреүен күреп, "Әгәр ҙә мин яҡшы булһам, ул да былай үҙгәрмәҫ ине", тип, үҙеңде ғәйепләргә кәрәк. Бер диндарҙың ҡатыны насар холоҡло була. Әммә ул ҡатынының бар ҡылыҡтарына ла түҙеп йәшәй бирә. Таныштарының ҡатынын ни өсөн айырмауы хаҡында биргән һорауҙарына ул: "Ул осраҡта минең ҡатынымды уның мыжыҡлығына түҙә алмаған икенсе кеше кәләшлеккә аласаҡ. Мин, улар бер-береһен упҡынға ташлар, тип ҡурҡам,"- тип яуаплай.

- Әгәр ҙә ҡатыныңдың яҡшы эштәре арта ғына барһа, ул һәр эште яратып башҡарһа, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр уҡырға кәрәк. Сөнки диндар ҡатын - Хоҙай мәрхәмәте.

- Ҡатыныңа ҡарата шундай мөнәсәбәттә булырға кәрәк: ул башҡаларға ҡарағанда уны нығыраҡ һөйгән ире барлығын белерлек булһын.

- Аҙыҡ-түлек магазины, ит кәштәләре, баҙарҙарҙан әйбер һатып алыу эштәрен ҡатын-ҡыҙ иңенә һалырға ярамай. Уның тәҡдимдәрен, кәңәштәрен күҙ уңында тотоп, йорт менән үҙең идара ит. Әммә ҡатыныңдың кәйефен төшөрмәү өсөн йорт эштәренең ҙур өлөшөнә уны бағышламау кәрәк.

- Ғаиләлә ҡатын түгел, ә ир кеше баш булырға тейеш.

- Ҡатынының ҙур гонаһ булмаған яңылышлыҡтарын ир күрмәҫкә тырышырға тейеш. Ситтәрҙән уның серҙәрен һаҡлау кәрәк.

- Хәләл ефетеңә маҡтау һүҙҙәрен йәлләмәҫкә, үҙеңә ҡаратып алыу өсөн уны шаяртып алырға кәрәк. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡатындарына ҡарата бар яҡлап та яҡшы мөғәмәлә өлгөһө булған. Мәҫәлән, Ул (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәш ҡатыны Ғәйшә менән ҡыуышып йүгереп йөрөр булған. Тәүге тапҡырында Ғәйшә беренселекте бирмәгән, икенсе тапҡыр иһә, Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беренсе булып йүгереп килгән. Хаҡ мосолман өсөн ҡатыны менән уйындар ойоштороу гонаһ һаналмай, киреһенсә, кәрәкле яҡшы эш булып иҫәпләнә.

- Матур көндәрҙә мосолман ир ғаиләһен кешеләр һирәгерәк йөрөгән, гонаһлы эштәр ҡылынмаған урындарға саф һауа һулатырға алып сығырға тейеш.

- Ҡатынын Ҡөрьән уҡырға өйрәтергә, шулай уҡ мотлаҡ үтәлә торған (фард) һәм рөхсәт ителмәгән (хәрәм) эштәр тураһында белем бирергә тейеш.

- Мосолманға ҡатынына белгертмәйенсә юлға сығырға йә хаж ҡылырға ярамай.

- Әгәр ҙә ҡатыны намаҙ уҡый һәм бар эштәрендә лә иренә буйһона икән, икенсегә өйләнергә кәрәкмәй. Сөнки уларға ҡарата ғәҙел була белмәгән ир тамуҡ утында янасаҡ.

- Ҡатыныңа бәләләрең, ҡайғыхәсрәттәрең, дошмандарың һәм бурыстарың тураһында һөйләргә кәрәкмәй.

- Доға ҡылғанда хәләл ефетеңә рәхмәттәр уҡырға, һәр ваҡыт фатиханды биреп торорға кәрәк. Әммә бер ҡасан да уны ҡарғыш менән яманларға ярамай. Ул ире өсөн тормош иптәше лә, фекерҙәше лә, һөйгәне лә, хәлен белеп тороусы ла.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Яһалма сикләүҙәр ҡормағыҙ

**Уңыш ҡаҙаныуҙың төп стратегияһы ябай ғына: ыңғай булмаған хәл-торош тигән аңлатма юҡ. Бары тик һабаҡ алып булғандары ғына бар. Тормошта, ғөмүмән, хаталар булмай, бары тик беҙгә үҫергә һәм камиллыҡҡа илткән тауға күтәрелергә мөмкинлек биргән һабаҡтар ғына бар.**

Әгәр һеҙ үҙегеҙгә "Мин мультимиллионер булыр өсөн бик йәшмен", "Мин донъя кимәлендәге йондоҙ булырлыҡ матур түгелмен", "Мин үҙ эшҡыуарлығымды башлар өсөн ялҡауыраҡмын", "Миңә быныҥ өсөн аҡса етмәй" тигән сикләүҙәр ҡуйһағыҙ, рухығыҙ яйлап һүнәсәк һәм һеҙ иң алама күҙаллауҙарға дусар буласаҡһығыҙ. Үткәндәрҙең ҡоло булмағыҙ, киләсәктең архитекторы булығыҙ. Был тормошта һәр ваҡиғаға ниндәйҙер мәғәнә һалына, һәр проблема беҙҙе күп нәмәгә өйрәтә алған һәм яңы ҡаҙаныштарға юлды еңеләйткән һынау булып тора. Һәр мәл, һеҙ уны файҙаланып ҡалаһығыҙмы, юҡмы - үҙенсә уникаль. Әгәр ошо боронғо аҡылды аңлай алһағыҙ, һәр тәжрибәне, һәр һабаҡты рәхмәтле булып ҡабул итәсәкһегеҙ. Әгәр инде ошо принципты аңламаһағыҙ, маңлайығыҙға яҙылған яҙмышты бер ваҡытта ла тормошҡа ашыра алмаясаҡһығыҙ.

Кешенең аңы киң һәм ҙур ҡеүәткә эйә. Әммә ул күпселектә ҡулланылмай ҡала. Хатта иң билдәле аҡыл эйәләре лә мейеләренең 25 проценты самаһын ғына эшләтә, тиҙәр. Ә ҡалған 75 проценты нимә эшләй? Гималай тауҙарында йәшәүсе һинд йогалары хатта аңдарын йөрәк тибеше, аш эшкәртеү, нервылар системаһының эшмәкәрлеге менән идара итеүҙе контроллəүгә күнектергән. Был көнсығыш аҡыл эйәләре биш мең йылдан ашыу инде аңдың төпһөҙ ҡоҙоғонан белем ала һәм уның менән идара итеүҙе фән кимәленә еткергән. Медитация һәм тын алыуҙы контроллəү ысулдары иҫәбенә йогалар түҙгеһеҙ физик ауыртыныуға ла сыҙай һәм оҙаҡ ваҡыт ашамай, йоҡламай йәшәй ала. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙа шундай ҡеүәт йәшеренгән. Бер ниндәй сиктәрҙе лә ҡабул итмәгән кеше өсөн сикләүҙәр юҡ.

Кеше аҡылы һәм ихтыяры, әгәр уның менән дөрөҫ файҙаланһаң һәм уларҙы камиллаштырһаң, мөғжизә тыуҙыра. Ғәҙәттә, кеше мейеһе көнөнә яҡынса 60 мең уй уйлай. Шуларҙың 95 проценты быға тиклем уйланылған уйҙарҙы тәшкил итә. Әгәр ҡалыплашҡан фекерләүҙең сиктәрен юйғанда, көслө аҡыл энергияһын азат итергә һәм үҙеңдә сикләүҙәрһеҙ уйлау-хыялланыу ғәҙәтен тәрбиәләргә мөмкин. Барлыҡ уңышлы кешеләр ҙә донъяның беҙҙең барлыҡ уйҙарыбыҙҙың берлеге икәнен аңлаған һәм шуға ла улар үҙҙәренә бер генә булһа ла кире уй уйларға рөхсәт итмәй. Яҡшы уй уйлау - ул бары тик ябай ғәҙәт. Әгәр аҡыл баҡсағыҙ сүп үләндәренә күмелгән икән, әлбиттә, тәүге осорҙа еңеллеккә өмөт итмәгеҙ. Ә инде ғәҙәтте формалаштырыу арҡан үргән кеүек - көн һайын яңы еп өҫтәлә, көн һайын арҡан ҡатылана бара, бер көн килеп уны өҙөп тә булмаясаҡ.

Ә хәҙер ултырығыҙ ҙа, үҙегеҙҙе үткәндәрҙән ысҡындырмаған, матур тормошҡа өлгәшергә кәртә булып торған ҡағиҙәләр, ҡалыптар, уйҙарҙы ҡағыҙ битенә яҙығыҙ. Үҙегеҙҙе нимәләр сикләгәнен таныу - уларҙы башығыҙҙан алып ташлауға беренсе аҙым.

**Робин ШАРМА.**



## 12 МАРТ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Криминальные хроники"
12.55 "Право на защиту"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Сердце Марии". Сериал
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Личные обстоятельства". Сериал
22.30 "Краткий курс счастливой жизни". Сериал
23.35 "Познер"
00.35 Ночные новости
23.50 "Любовники". Мелодрама
01.40 "Почти знаменит". Драма
03.00 Новости
04.05 "Криминальные хроники"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Хрзяйка моей судьбы". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 260-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 24-я серия. Сериал
17.55 "Брачное агентство Николая Баскова"
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дыши со мной. Счастье взаймы", 4-6-я серии
23.50 "Анжелика Балабанова. Русская жена для Муссолини". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Девушка-сплетница-3"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный, 4". "Без единой остановки". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Хвост". "Нелюбимая дочь", "Загородный детектив". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Лесник". "Клад". Сериал
21.25 "Ментовские войны-5". "Голова медузы". Остросюжетный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Центр помощи "Анастасия"
02.35 "В зоне особого риска"
03.10 "Холм одного дерева". Драматический сериал
04.55 "Преступление будет раскрыто". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00 "Новости недели" (на баш.яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели" (на русс.яз)**
**12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Еду в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.45 Худ. фильм**
**20.40 "Сенгельдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться". Ток-шоу**
**00.15 "Ак мондар". Р. Сафин**

## 13 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Криминальные хроники"
12.55 "Право на защиту"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Сердце Марии", 3-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Личные обстоятельства", 4-я серия
22.30 "Краткий курс счастливой жизни", 2 -серия
23.35 "Ночные новости"
00.00 "Следствие по телу", 10-я серия
00.55, 03.05 "Аполло-13". Историческая драма
03.00 Новости
03.35 "Чудеса исцеления"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Хозяйка моей судьбы". Сериал
12.55 "Тайны следствия". Черная метка"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 261-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 25-я серия
17.55 "Брачное агенство Николая Баскова"
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дыши со мной. Счастье взаймы", 7-я и 8-я серии. Сериал
22.55 "Наина"
23.50 "Охота на призраков". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.50 "Девушка - сплетница-3"
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный, 4", "Охота на Тайпана". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Хвост". "Косая королева" Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Лесник". "Подарок для храброго"
21.25 "Ментовские войны-6". "Банда"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Таинственная Россия: Республика Бурятия. Рецепты вечной жизни?"
00.35 "Детектив Раш". Сериал
01.30 "Квартирный вопрос"
02.35 "Чудо-люди"
03.10 "Холм одного дерева". Сериал
04.55 "Преступление будет раскрыто". Детективный сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 18.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Любимые мелодии"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Книга сказок"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.15 "Взгляд без слов"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45, 19.45 "Худ. фильм"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Песни композитора З. Исмагилова"**

## 14 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Криминальные хроники"
12.55 "Право на защиту"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Сердце матери", 4-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Личные обстоятельства", 5-я серия
22.30 "Краткий курс счастливой жизни"
23.35 Ночные новости
00.00 "На ночь глядя"
00.55 "Американский пирог: свадьба"
02.45, 03.05 "Сердце дракона". Приключения
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Хозяйка моей судьбы". Сериал
12.55 "Тайны следствия". "Черная метка"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 26-я серия
17.55 "Брачное агентство Николая Баскова"
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дыши со мной. Счастье взаймы". Сериал
22.55 "Исторический процесс"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
02.00 "Девушка - сплетница-3"
02.50 "Девушка - сплетница-4"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный, 4". "Свет Ангела"". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Хвост". "Смерть целителя", "Красота - убийственная сила". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Лесник". "Без вести пропавший". Детективный сериал
21.25 "Ментовские войны-6". "Банда"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Частник". Криминальная драма
01.30 "Футбол. Лига чемпионов УЕФА "Реал" (Испания) - ЦСКА (Россия). Прямая трансляция
03.40 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
04.10 "Дачный ответ"
05.10 "Преступление будет раскрыто"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.15 "За порогом"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Поет Р. Динахметов"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Алтын тирма". Семейная телевикторина**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.45 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. Плей-офф 1/2 финала конференций**
**23.00 "Пора разобраться". Ток-шоу**
**00.15 "Любимые мелодии"**

## 15 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Криминальные хроники"
12.55 "Право на защиту"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Сердце Марии", 5-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Личные обстоятельства", 6-я серия
22.30 "Краткий курс счастливой жизни", 4-я серия
23.35 Ночные новости
00.00 "В контексте"
00.55 "Призрачный гонщик". Боевик
02.50, 03.05 "Откровенный разговор". Комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Хозяйка моей судьбы"
12.55 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Таежная любовь", 2-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 27-я серия
17.55 "Брачное агентство Николая Баскова"
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи. малыши!"
21.00 "Дыши со мной. Счастье взаймы". Сериал
22.55 "Поединок"
23.50 "Скальпель для первых лиц. Тайная хирургия". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Горячая десятка"
03.25 "Девушка-сплетница-4"
04.15 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный, 4". "Проходная пешка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Хвост". "Удар небоскребом", "Убийство в шоколаде"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Лесник". "Захват"
21.25 "Ментовские войны-6". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Таинственная Россия: Камчатка. Древние технологии работают до сих пор?"
00.30 "Детектив Раш"
01.30 "Война против своих. Игнатьев. Корнилов. Махров"
02.25 Футбол. Лига Европы УЕФА
04.35 "Преступление будет раскрыто"
05.25 "Лига Европы УЕФА. Обзор"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Тэмле"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Гэлэмэт донъя"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 Док. фильм**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.45 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. Плей-офф. 1/4 финала конференций. Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**00.15 "Барокко на все времена". "Башкирия". Концерт**

## 16 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости
12.20 "Криминальные хроники"
12.55 "Право на защиту"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Личные обстоятельства", 7-я и 8-я серии
23.30 "Прожекторперисхилтон"
00.05 "Игра". Триллер
02.30 "Возвращение Скакуна". Приключения
04.15 "Опека". Драма

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Хозяйка моей судьбы"
12.55 "Мой серебряный шар. Николай Рыбников"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Таежная любовь", 3-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 28-я серия
17.55 "Брачное агентство Николая Баскова"
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дыши со мной, счастье взаймы". Сериал
22.55 "Улыбнись, когда плачут звезды". Мелодрама
00.55 "Дурман любви". Романтическая комедия
03.00 "Девушка-сплетница-3"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Справедливость". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Женский взгляд"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Чужой район". "Дурь", "Пропажа"
21.30 "Лесник". "Капкан"
21.25 "Ментовские войны-6". "Исполнитель желаний"
23.20 "Сибиряк". Криминальная драма
01.15 "Беги без оглядки". Комедия
03.00 "Холм одного дерева"
04.45 "Преступление будет раскрыто". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Гэлэмэт донъя"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Щит экономики РБ"**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. Плей-офф. 1/2 финала конференций**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Муз-базар"**
**00.45 "Презентационный фильм "Спутник Телеком"**

## 17 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "На Муромской дорожке"
07.50 "Играй, гармонь любимая!"
08.35 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Александр Домогаров. Исповедь одинокого мужчины"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.10 "И все-таки я люблю..."
16.55 "В черной-черной комнате..."
18.00 Вечерние новости
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "Кубок профессионалов"
21.00 "Время"
21.25 "Кубок профессионалов". Продолжение
22.15 "Yesterday live"
23.20 "Коко до шанель". Биографическая драма
01.30 "Погоня". Драма
04.00 "Мотивы воздаяния"
05.25 "Криминальные хроники"

### РОССИЯ 1

04.55 "Старый знакомый". Комедия
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 " Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Всегда говори "всегда". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Всегда говори "всегда". Продолжение
16.00 "Субботний вечер"
18.00 Шоу "Десять миллионов"
19.05 "Непутевая невестка". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Непутевая невестка". Продолжение
23.40 "Девчата"
00.15 "Смертельное оружие-3". Боевик
02.45 "Ангел мести". Криминальная драма
04.15 "Комната смеха"

### НТВ

05.35 "Мур есть Мур-3"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Улицы разбитых фонарей"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Шоковая терапия". Криминальная драма
00.45 "Час Волкова". Сериал
02.55 "Холм одного дерева"
04.35 "Преступление будет раскрыто"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Крещенские морозы". Концерт**
**08.30 Художественный фильм**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Взгляд без слов"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". М. Карим. "Батя Ялалетдин". Спектакль**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.30 "Хазина"**
**20.00 "Башкорттар"**
**20.30 "За порогом"**
**20.45 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Сделано в "Тамыре"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры-2011". Гала-концерт**

## 18 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Командир счастливой "Щуки"
08.15 "Служу Отчизне!"
08.50 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Папаши"
17.15 Концерт Софии Ротару
18.40 "Клуб Веселых и Находчивых"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Гражданин Гордон"
23.35 "Клан Кеннеди". Историческая драма
01.10 "Взлеты и падения: история Дьюи Кокса". Комедия
03.20 "С ног на голову"
04.20 "Криминальные хроники"

### РОССИЯ 1

05.15 "Один из нас". Боевик
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Всегда говори "всегда". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Всегда говори "всегда". Продолжение
16.05 "Смеяться разрешается"
18.20 "Фактор А"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Любви целительная сила". Мелодрама
23.00 "Девочка". Драма
01.55 "Вымогательство". Криминальная драма
04.10 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.35 "Мур есть Мур-3". Сериал
07.25 "Живут же люди!"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Тайный шоу-бизнес"
22.55 "НТВшники"
00.00 "Антиснайпер. Новый уровень". Боевик
02.35 "Чудо-люди"
03.10 "Холм одного дерева". Сериал
05.05 "Преступление будет раскрыто". Сериал

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Крещенские морозы"**
**08.30 Мультфильм**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Бауырсак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Шэп арба"**
**10.40 "Гора новостей"**
**10.50 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Книга сказок"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.30 "Башкорттар"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**17.00 "Дорога к храму"**
**17.30 "Орнамент"**
**18.00, 18.45 "Ерем моңо". К 80-летию со дня рождения поэта и драматурга Р. Сафина**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.35 "Новости спорта. Итоги"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Вечер.com"**
**22.45 "Соцветие Башкортостана"**
**00.15 "КВН РБ. Избранное"**

ИҒЛАН

**Белорет районы Уçманғәле ауылында өй һатыла. Хаҡы 350 мең һум. Һатыулашырға мөмкин. 8-927-087-86-40 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ИРҘӘРЕБЕҘГӘ ӘСӘЙ ТҮГЕЛ...

## ҡатын булайыҡ!



**Бер көндө уйламағанда бала саҡ әхирәтем килеп инде. Өфөгә эш буйынса килгән дә, эштәрен теүәлләп өлгөрмәгән икән. "Бына нисек йәшәп ятаһың икән, эгоист (ул мине элек-электән шулай тип ирештерә). Ваҡытында һинең һүҙҙәреңә ҡолаҡ һалырға кәрәк булған икән шул минә лә..." - тип көлөп ҡуйҙы ул өйҙө байҡап сыҡҡас. Һораулы ҡарашымды күреп, бер нисә йыл элек булған һөйләшеүҙе хәтергә төшөрҙө.**

Ул ваҡытта ауыл яғына киткән автобусҡа өлгөрә алмайынса, уларҙа бер кис йоҡлап китергә тура килгәйне. Тыштә үҙәккә үтерлек һыуыҡ. Әхирәтемдең ҙур бидонды санаға ултыртып, бер ҡулына биҙрә тотоп, һыуға китергә йыйынғанын күргәс: "Нинә еҙнәйҙе ебәрмәйһең, инеп, үҙем әйтәйемме?"- тип һорап ҡуйҙым. "Ул әле генә эштән арып ҡайтты, шуның менән генә йонсотмайым инде, үҙем барам да киләм", - тине әхирәтем йылмайып. "Аҙаҡ һыуҙы ғүмер буйы үҙенә ташырға тура киләсәк бит", - тинем шул саҡ уның да эштән арып ҡайтыуына төрттөрөп. Әммә ул барыбер тыңламаны. Кис буйы ашарға бешереп, балалары менән мәж килде. Еҙнәй кеше автобуста эшләй ине, таң менән торорға кәрәк, тип, ял итте. Әхирәтем таңғы биштә тороп, ирен ашатып-эсерҙе лә, етегә тиклем аҙыраҡ ятып торҙо. Унан ике балаһын кейендереп, балалар баҡсаһы аша эшенә йүгерҙе. Мин уның бына ошолай бар мәшәҡәттәрҙе үҙ иңенә алып, иренә эш тә, һүҙ ҙә тейҙермәсҡә тырышыуын күреп, "Дөрөҫ эшләмәй бит был" тигән һығымта яһап ҡуйғайным ул саҡта. "Нинә уны бәпәй кеүек ҡарайһың, ул һинең балаң түгел дәбаһа, ә ирең!" - тип аҡыл өйрәтә башлағас, яратманы: "Мин һинең кеүек эгоист була алмайым шул..." - тигәйне. Унан: "Һин былдай холҡоң менән кейеүгә сыҡҡас нисек йәшәрһең?.."- тип аптырап өҫтәп тә ҡуйғайны...

Хәҙер әхирәтем икенсегә кейәүҙә. Быныһында инде аҙығын өрөп ҡабырға тырыша икән. "Йыш ҡына һине иҫемә төшөрәм, һин минең урында нимә эшләр инең икән, тип уйлап алам. Йәш булһаң да ул ваҡытта ҡайһылай дөрөҫ фекерләгәнһең", - тине ул теге саҡтағы һөйләшеүҙе иҫләп.

Ғаилә бәхете нимәлә, тигән уйҙар башымдан сыҡмай. Тормош ҡорғанда береһе лә, насар йәшәйем, тигән уйҙа булмай бит. Ҡайҙан килеп тыуа был аңлашылмаусанлыктар? "Бәйләнештә" сайтында булһа кәрәк, "Бәхетле булыу өсөн ирҙәргә күп кәрәкмәй, тәмле аш һәм секс булһа, етә" тигәнерәк һүҙҙәрҙе укып, ҡайһылай дөрөҫ яҙғандар, тип көлөп ултырғайным. Ысын бит!

Кейәүгә сыҡҡас, әлбиттә, минең дә барыһы ла ал да гөл булмағандыр. Әммә мин, шул эгоист гәҙәтемә барып, беренсе урынға барыбер ҙә үҙемде ҡуйғанмындыр. Ирҙәрҙең бик йомшаҡ яғы бар: ни генә тимә, улар өсөн енси яҡынлыҡ беҙгә, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда, мөһимерәк. Бына ошоно ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ аңлаһа һәм уны урынлы файҙалана белһә, күпме проблеманан ҡотолорҙар ине! Ирем минә һалынып, ярҙамға мохтаж бәләкәй бала кеүек күҙҙәремә ҡарап тора башлағас, уйлана ҡуйҙым. Аңлап тораһығыҙ: арып-арманһыҙ булғандан һуң ниндәй һөйөп-һөйөшөү ҡайғыһы ти! Шуға күрә иремә был турала иплэп кенә аңлаттым. Ошонан һуң ул мине арытмаҫ өсөн барыһын да эшләргә, хатта ҡулында күтәреп кенә йөрөтөргә риза ине. Ашарға беҙ гел бергә әҙерләнек, кер йыуғанда ла янымда йөрөнө (эргәлә хәбәрҙәрен һөйләп, һыу түгешеп йөрөһә лә ярҙам бит), ул ваҡытта автомат машина юҡ ине әле. Уның шулай минә ярҙам итергә тырышып йөрөгәнен күреп, уға ла яҡшылыҡ ҡына эшләгә килеп тора. Тәмле аҙыҡтар үҙенән-үҙе бешерелә. Йәнә ирҙәр маҡтағанды ярата. Берәй нәмә эшләһә, шул мәлдә хуплап-йәйлап ебәрһәң, һинең өсөн тауҙар аҡтарырға әҙер. Бына, күрәһегеҙеме, ҡыҙҙар, бәхет өсөн күп тә кәрәкмәй. Ни бары үҙегеҙгә ни кәрәк икәнен бик матур ғына итеп, эйе, бик матур ғына итеп төшөндөрөргә һәм ваҡыт-ваҡыты менән иҫенә төшөрөп торорға ғына кәрәк. Ул ваҡытта һеҙ бар донъя йөгөн тартҡан бисә лә, ирен балаһы урынына ҡараған әсә лә түгел, ә "көләшем", "кәҙерлем", "һөйөклөм" генә буласаҡһығыҙ!

**АЙНАРА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

### УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘҘЫ, ӘСӘЙҘӘРЕБЕҘҘЕ...

"Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы 8 Март - яҙ һәм изгелек байрамы менән үҙенең ҡатын-ҡыҙ уҡыусыларын, әсәйҙәрҙе, өләсәйҙәрҙе һәм, әлбиттә, үҙҙәренең дә әсәйҙәрен - Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылынан **Иҙелбаева Мәрзиә Низам ҡыҙын**, Иҫке Сибай ауылынан **Батыршина Зөһрә Мәзһар ҡыҙын**, Ишмөхәмәт ауылынан **Латипова Мәрхәбә Ғәҙелша ҡыҙын**, Темәс ауылынан **Ишбулатова Сәлимә Шөғәйеп ҡыҙын**, Ҡолсора ауылынан **Абдрахманова Мөнирә Мәжит ҡыҙын**, Өфөнән **Зәйҙуллина Рәмзиә Фәрит ҡыҙын**, Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан **Кинйәбаева Зөһрә Фәтҡулла ҡыҙын**, Мәсетле районы Йоноc ауылынан **Шакирова Нәфисә Асҡар ҡыҙын**, Салауат районы Лағыр ауылынан **Йәнтүрина Земфира Сибғәт ҡыҙын**, Әбйәлил районы Амангилде ауылынан **Сафиуллина Вәкилә Тәлғәт ҡыҙын**, Ғәбдин ауылынан **Шәрәфетдинова Ғәмбәрә Ғәҙән** ҡыҙын, Йәнекәй ауылынан **Нафикова Нәйлә Иштимер ҡыҙын**, Учалы районы Миндәк ауылынан **Иҡсанова Флорида Нурмөхәмәт ҡыҙын котлай!**

Әҙәм балалары тышҡы ҡиәфәте, холҡо, ҡылыктары менән нисек кенә төрлө-төрлө булмаһын, уларҙың шундай бер бәхетле уртаҡлығы бар: бөтәбеҙҙең дә әсәләре иң изгеһе, иң мәрхәмәтлеһе, иң уңғаны, иң матуры. Беҙ ҙә, төрлө-төрлө булһаҡ та, әсәйҙәребеҙгә оҡшап, мөмкин тиклем яҡшы күңелле, уңған, бер-беребеҙгә, туғандарыбыҙға мәрхәмәтле булырға тырышайыҡ. Һәм, әлбиттә, беҙгә ошо яҡты донъяны бүләк иткән әсәйҙәребеҙҙе онотмайыҡ: йышыраҡ ҡайтып, хәл-әхүәл белешәйек, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтәйек ҡәҙерлеләребеҙгә. Тағы шуны ла онотмайыҡ: һөйөклө әсәйҙәребеҙ янында үткәргән һәр көнөбөҙ - оло һәбаҡ, улар менән осрашыу сәғәттәре - күңел байрамы ул. Йышыраҡ булһын тормошобоҙҙа ана шундай байрамдар!

**"Киске Өфө"ләр.**

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...

# ҺЫУ МЕНӘН ЙЫУЫНЫУМЫ,

## крем менән таҙарыныу һәйбәтме?

**Оҙаҡ йылдар инде косметологтар һәм дерматологтар араһында, нимә файҙалыраҡ - битте һыу менән йыуыуымы әллә был маҡсатта махсус косметик саралар ҡулланыуымы, тигән бәхәс бара.**

Быуаса бихисап косметология клиникалары, һыу битте ҡорота, шуға күрә иртәнге һәм киске процедуралар өсөн мотлаҡ косметик һөт, лосьон йәки тоник ҡулланыу зарур, тип ҡәтғи белдерҙе. Был фекер бит тиреһе кибеүенә бәйле тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре менән нығытылып килде. Йәғни ғәҙәти крандан аҡҡан һыу менән йыуынғандан һуң бит тиреһе тартылып, "эзбиз" пленкаһы менән ҡаплана. Ҡайһы бер айырым төбәктәрҙәге һыуҙан һуң тирене "эзбиз" пленкаһы урынына тутлы, тоҙло пленка ла ҡаплауы ихтимал. Әгәр йыуынғандан һуң шунда уҡ туҡландырыусы йәки дымландырыусы косметик крем һөртһәгеҙ, тире үҙ функцияларын дөрөҫ башҡармаясаҡ. Шуға күрә һыу менән йыуыныу ҡәтғи тыйыла ине.

Әммә XX быуат һуңында косметик һөттөң һөҙөмтәһеҙерәк һәм зыянлы булыуы асыҡлана. Беренсенән, битгәге косметиканы, шул иҫәптән көн оҙоно ултырған сандды иретеп, ул тиренең төпкө ҡатламына бактериялар үтеп инеүен еңеләйтә. Икенсенән, һауыты асылған косметик һөттө һыуытҡыста һаҡламаһағыҙ, ул 3-5 көндән үҙе үк микробтар үрсетмәнә әйләнә. Өсөнсөнән, биткә таҙартыу өсөн һөртөлгән сараны яҡшы итеп йыуып алмағанда, ул һауа менән ҡатнашып, токсик пленка барлыҡҡа килтереүе һәм уның аҫтында ялҡынһыныу процесы башланыуы ихтимал.

Дерматологтар битте һыу менән йыуырға ярамаған бер нисә сир һәм ваҡытлыса сәбәп бар, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, майлы себорея - май биҙҙәре дөрөҫ эшләмәүгә бәйле тире ҡатламдарының ауырыуы. Майлы себореяны дауалағанда битте таҙартыу өсөн махсус препараттар ҡулланыла, шуға күрә дауаланыу осоронда битте һыу менән йыуыу тыйыла. Йәки етди косметологик процедура эшләткәндән һуң тирене ваҡытлыса йыумай тороу хәйерле. Мәҫәлән, гликоль пилинғы (химик пилингтың бер төрө) эшләгәндән һуң реабилитация осоронда тирене таҙартыусы һәм һаҡлаусы махсус крем ҡулланыу зарур. Барлыҡ башҡа осраҡтарҙа - ҡоро, майлы, ҡатнаш тире өсөн таҙа һыу ҡулланырға кәңәш ителә. Бөгөн косметологтар һабынға ҡаршы түгел, әммә ғәҙәти һабын урынына үҫемлек майҙарынан һәм үлән экстракттарынан эшләнгән тәбиғи һабынға өҫтөнлөк бирелә.

Ләкин беҙҙең тәнебеҙ биттән генә тормай. Тәнебеҙҙең башҡа өлөштәре менән нимә эшләргә? Мәҫәлән, ҡайҙалыр сәсебеҙҙе йыуһаҡ, улар бала сәсе кеүек йомшарып китә, икенсе урында һаламға әйләнә, ҡайһы берҙә сәстәрҙән шампунды ғүмерҙә лә йыуып бөтөрә алмаҫтай тойолоп китә. Хәҙер көн һайын ингән душ сәсегеҙгә һәм тирегеҙгә нисек тәьҫир иткәнен күҙ алдына килтерегеҙ инде.

Әйе, бөтөн ерҙә лә крандан аҡҡан һыу идеалдан алыҫ тора. Эш уның бик ҡаты йәки бик йомшаҡ булыуында ла түгел, ә сәләмәтлек өсөн хәүефһеҙ булһын өсөн уға хлор ҡушылыуҙа. Халыҡ инде быға өйрәнеп бөткән, хатта уның еҫен дә һиҙмәй. Ә бит хлор - ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙы һәм вирустарҙы ғына түгел, ә... кешенең үҙен дә үлтереүсе матдә. Йәйләп ғүмерҙе ҡыҫҡарта ул. Һуңғы тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: душ ингәндә хлор парҙарын даими еҫкәү аллергиянан алып баш ауырыуына, хатта яман шеш ауырыуына сәбәп булыуы мөмкин. Юҡҡа ғына хлор химик ҡорал - иприт һәм фосген сифатында ағыулау газы составына инмәй. Һыу торбаларында хлор санитар нормалар буйынса көйләнһә лә, берәү ҙә коммуналь хеҙмәттәрҙең уны күҙәтеп тороуына инана алмай. Ҡайһы бер осраҡта хәл-торош үҙе үк юғары концентрация һалыуҙы талап итә. Мәҫәлән, яҙғыһын ҡыш буйына яландарҙа, ҡар өҫтөндә тупланған бысраҡ тупраҡ аша һыуға эләгә, бысраныуҙың юғары кимәлен нейтралләштереү өсөн хлор ҡулланыла. Йәки ныҡ эҫе ваҡытта һыу яткылыҡтарында бактериялар күпләп үрсей башлай, ошо ваҡытта ла һыуға хлор күпләп һалына.

Әлбиттә, ғалимдар һыуҙы хәүефһеҙ таҙартыу тураһында уйлана.Сөнки кеше 80 процентка һыуҙан тора һәм уның сәләмәтлеге туранан-тура һыуҙың сифатына бәйле.

**Һыу нигеҙендә тирене тәрбиәләү өсөн бына тигән тәбиғи саралар эшләргә мөмкин. Иң яҡшылары - үҫемлек экстракттарынан эшләнгән боҙ кубиктары. Уларҙы әҙерләү өсөн фильтр аша үткәрелгән таҙа һыу һәм үҫемлек компоненттары кәрәк: майлы тире өсөн - кипкән кесерткән һәм йәшел сәй, ҡоро тире өсөн - роза сәскәләре таждары һәм яңы ғына һыҡтырылған ҡурай еләге һуты, нормаль тире өсөн - кипкән гөлйемеш, ҡатнаш тире өсөн - һоло. Артабан таҙа һыуҙы 80 градусҡаса йылытып (ҡайнатырға ярамай), уны әүҙем ингредиент (1 ҡалаҡ үҫемлек ҡатнашмаһына 1 стакан һыу) өҫтөнә ҡойорға, ҡапҡас ябырға һәм һыуытып, һөҙөргә. Артабан формаларға ҡойоп туңдырырға. Көн дә иртән йыуынғандан һуң ошо кубиктарҙы битегеҙгә ышҡығыҙ: боҙ ҡан әйләнешен яҡшырта, коллаген (тиренең тығыҙлығы өсөн яуап биреүсе аҡһым) синтезын яҡшырта, шешенеүҙе бөтөрә.**

**Майлы тире өсөн имән ҡайырыһынан һыу төнәтмәһе әҙерләргә мөмкин: 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡайырыға бер стакан һыу ҡойорға һәм был ҡатнашманы һыуытҡысҡа алып ҡуйырға кәрәк. Көнөнә бер-ике тапҡыр битегеҙҙең майлы өлөшөн шул төнәтмә менән таҙартығыҙ, ул май биҙҙәренең эшмәкәрлеген әкренәйтә. Төнәтмәне һыуытҡыста бер аҙна тоторға мөмкин, бер аҙна үткәс, яңы төнәтмә эшләргә кәрәк.**

✓ *Вәғәҙәләргә һаран булма, ҡатын-ҡыҙҙы вәғәҙәләрҙән башҡа бер нәмә лә шул тиклем ныҡ мауыҡтырмай.*

*(Овидий).*



ХАТТА КИ...

# МАТУРЛЫҠТЫ ТАБАҠҠА ҺАЛЫП...

## табынға сығармайҙар

**Йәштәр өсөн үткәрелгән күп кенә саралар, бәйгеләр тик күңел асыуға, мәғәнәһеҙ иһаһайлап көлөп ҡайтыуға ҡоролған булыуына өйрәнеп тә бөткәнбеҙ инде. Уларҙы ойоштороусыларҙың: "Йәштәрҙе шул көлкө әйбер ҡыҙыҡһындыра ла инде",- тип ышандырырға тырышыуы күп кенә тамашаларҙың әһәмиәтен юҡҡа сығара. Бына күптән түгел "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Һылыуҡай-2012" бәйгеһе булып үтте. Был республикала егерменсе тапҡыр үткән сараны тамаша ҡылырға ярата халыҡ. Нисек ойошторолоуына, йыл да күңел төңөлдөргән мәлдәре булыуға ҡарамаҫтан, зал һәр саҡ шығрым тулы тамашасы йыя. Был юлы бәйгенән ниндәй тәьҫораттар алып ҡайтты икән йыйылыусылар?**

**Шәүрә ҒИЛМАНОВА, телерадиосәнғәт мәктәп-студияһы директоры:** Заманында "Һылыуҡай" республика гүзәллек бәйгеһенә кем ҡыйыуыраҡ, кем батырыраҡ, шулар килә торғайны. Әммә улар рухи яҡтан асылып етмәй ине. Бәйге ваҡытында ла тышҡы ҡиәфәткә күберәк баҫым яһалды. Хатта ҡыҙҙарҙы сәхнәгә купальник кейҙереп сығарған саҡтар ҙа булды. Бөгөн купальник юҡ, әммә беҙ һылыуҙарҙың һомғол буй-һынын былай ҙа күрҙек. Был, минеңсә, бәйгенең бер ыңғай яғы булды. Икенсенән, быйыл саф башҡортса һөйләшеүгә баҫым ныҡ яһалған, сит тел һүҙҙәрен ҡатыштырып, ыҡ-мыҡ итеп тороусылар булманы. Бәйге барышында бер нәмә генә күңелде ҡыра бирҙе, ул да булһа, донъя кимәлендәге бәйгеләрҙең антуражы - сағыу дефиле, мода күрһәтеүгә ҙур урын бирелеүе. Тышҡы матурлыҡ түгел, күңел матурлығы мөһим, тип әйтәбеҙ икән, тап ошондай бәйгеләрҙә уны күрһәтергә кәрәк тә. Һылыуҙар үҙҙәре яҙған дүрт юллыҡты яттан һөйләне. Шиғыр һөйләү кешенең эске донъяһын асып бирмәй, ул бит ятланған текст. Элекке һымаҡ, ҡатнашыусы ҡыҙҙарға аҡыллы һорауҙар биргәндә уларҙың аң-белем, зиһен кимәле асығыраҡ күренер ине, шул етешмәне.

**Рәүйә САБИТОВА, табип:** "Һылыуҡай-2012" гүзәллек бәйгеһе сағыу биҙәлгән сәхнә, матур ҡыҙҙарҙың теҙелешеп, төрлө кейем кейеп, сәхнә түренә бер сығып, бер юғалып йөрөүе менән генә иҫтә ҡалды был юлы. Йылдағыса, яҡшы кәйеф, дәрт алайым, башҡорт ҡыҙҙарының иң-иңдәренә һоҡланып, ғорурланып ҡайтайым, тип килгәйнем байрамға. Әммә янып торған саф, наҙлы ҡараšты, нурлы йөҙ, эскерһеҙ йылмайыуҙы һәр бәйгеселә лә күрмәнем. Ошо ҡыҙҙарҙы был сәхнәлә түгел, бүтән урында осратһам, бик һирәктәрендә генә ысын башҡорт һылыуын таныр инем. Сөнки, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары борон-борондан уҡымышлы, зыялы, милли үҙенсәлектәрҙе, телде, ғөрөф-йолаларҙың үтәлешен һаҡлап ҡалыусы булған. Бәйгелә ҡатнашыусыларҙа ошо сифаттарҙы күрмәнем. Бәлки, бәйгелә күберәк мәктәп уҡыусыһы булған үҫмер ҡыҙҙар ҡатнашҡанлыҡтан шулай тойолғандыр. Улар, ысынлап та, был бәйге өсөн өлгөрөп етмәгән, физиологик яҡтан да, аҡыл, фекерләү йәһәтенән дә. Ашыҡмаҫҡа ине уларға. Бәйгеселәр барлыҡ һәләттәрен дә күрһәтеп өлгөрмәне, ҡыҙҙар менән етди темаларға әңгәмәләшеү, фекер алышыуға ваҡыт бүленмәне. Тамашасыларҙың еңелелпе һорауҙарына шул уҡ ҡалыптан яуап биреү, дефилеларҙың күп булыуы "Һылыуҡай-2012" бәйгеһен ялтырауыҡлы телешоуға әйләндерҙе. Һәр хәлдә, мин бәйгенең тематикаһын тойманым. Быға тиклем үткәрелгән бәйгеләр ниндәй ҙә булһа бер теманы алға һөрә торғайны, мәҫәлән, берәүһенең башҡорт ауыҙ-тел ижадына бағышланғанын иҫләйем.

**Рәсилә ИСЛАМҒОЛОВА, студент:** Сәхнә бик матур биҙәлгәйне. Әммә уның күрке - ярышҡа килгән ҡыҙҙар булырға тейеш ине бит. Бәйге программаһы тулы, төрлө һәм ҡыҙыҡлы булманы. Ҡуйылышында ла тарҡаулыҡ һиҙелеп торҙо. Бер-ике коллектив бейеү башҡарыуҙан сығып ҡына ҡыҙҙарға баһа биреү мөмкин түгел, тип иҫәпләйем. Дүрт юллыҡ шиғыр ятлау урынына, тамашасы билдәләгән темаға һәр береһенән ҡобайыр, шиғыр әйттертһәләр - шунда ысынлап та бәйге сәме тыуыр ине. Әлбиттә, үҙҙәре менән матур итеп башҡортса таныштырған ҡыҙҙарға һоҡландым. Әммә ошо тәьҫоратты мөхәббәт тураһында йыр башҡарырға сығыусы һинд йырсыһы боҙа яҙҙы. Бәй, башҡорт һылыуҙарына һөйөү йыры йырларлыҡ башҡорт егеттәре ҡайҙа булып бөткән?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Матурлыҡты табаҡҡа һалып, табынға сығармайҙар", тигән башҡорт халыҡ аҡылы бар. Ҡыҙҙар үҙҙәре тамашасы күңеленә хуш килһә лә, уларҙа ярыш сәме булмауы, ыңғай сифаттарын, һәләттәрен төрлө яҡлап күрһәтеп бөтә алмауҙары бошондорҙо. Сағыу бәйгене үҙебеҙҙең ерлеккә яраҡлаштырып, милли һыҙаттарыбыҙҙы сағылдырып, күңел асыу ғына түгел, фәһемле мәғлүмәттәр, рухи аҙыҡ биреүсе бер сара дәрәжәһенә еткереү өсөн эшләйһе лә эшләйһе әле. Программанан күңел төңөлөүе кисерелһә лә, бәйгенең өрйәны баһалама составының башҡа йылдарҙағынан айырмалы ғәҙел хөкөм итергә тырышыуы маҡтауға лайыҡ. Һәр хәлдә, Стәрлетамаҡ педагогия академияһы студенты Ләйсән Ғәрифйәнова "Һылыуҡай-2012" гүзәле итеп бик лайыҡлы билдәләнде.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**





## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҪМАҒАН ҠАҘАНДЫ...

## йөҙө ҡара ҡатын көткән

Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй, уңмаған ҡатындың ике ҡулын бәйләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алыштырғыһыҙ булыу өсөн туҡтауһыҙ үҙгәреп торорға кәрәк.

**(Коко Шанель).**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың холҡо юҡ, тип әйтеп булмай, уларҙың көн дә бер холҡ.

**(Генрих Гейне).**

Вәғәҙәләргә һаран булма, ҡатын-ҡыҙҙы вәғәҙәләрҙән башҡа бер нәмә лә шул тиклем ныҡ мауыҡтырмай.

**(Овидий).**

Көсһөҙлөктән яҙған ҡатын-ҡыҙ үҙенең бар ҡатын-ҡыҙ матурлығын юғалта.

**(Оноре де Бальзак).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике әхирәт кафеға сәй эсергә инә һәм береһе икенсеһенә шулай тип зарлана башлай: "Әсәйем туҡтауһыҙ телефондан шылтырата һәм эргәһенә килеүемде үтенә. Ҡайһы саҡта барам мин уның эргәһенә, ләкин ихлас һөйләшеү килеп сыҡмай. Уның минең тормошом, эшем, аралашҡан кешеләрем менән ҡыҙыҡһыныуы, үҙ-үҙен тотошо - береһе лә оҡшамай миңә, ҡыҙа башлайым, тупаҫ һүҙ ысҡындырам, әрләшеп китәбеҙ... Нисә барһаң да бер үк хәл ҡабатлана. Ваҡытым да юҡ минең уның эргәһенә барырға..." "Беләһеңме, ә мин әсәйем эргәһенә бик йыш барам, - ти икенсе әхирәт. - Эсем бошһа ла, ниндәйҙер проблема килеп тыуһа ла, кәңәшләшергә кәрәк булғанда ла мин уның эргәһенә ашығам..." "Ысынлапмы? Ҡара әле, һин минән яҡшыраҡ булып сыҡтың түгелме?" - ти тәүге әхирәт. "Юҡ, мин дә һинең кеүекмен, - ти икенсе әхирәт күңелһеҙләнеп. - Мин бит әсәйем эргәһенә зыяратҡа йөрөйөм. Ул әхирәткә күсте. Тере сағында мин дә һинең кеүек инем, уның менән осрашыуҙарҙан ҡаса инем. Хәҙер бына ул саҡтарҙы бик тә һағынам. Әсәйем миңә бик тә кәрәк хәҙер, ләкин һуң шул инде. Шуның өсөн, тиҙерәк аҡылыңа кил һәм әсәйең янына ашыҡ, әхирәт. Ҡәҙерлә уны. Уның мыжыҡлыҡтарын түгел, ә лайыҡлы яҡтарын ғына күрергә тырыш. Әсәйеңдең һинең өсөн иң ҡәҙерле кеше икәнен аңлар өсөн уның зыяратҡа күсеүен көтмә. Бына хәҙер мин әсәйем өсөн бер ни ҙә эшләй алмайым. Бынан минең күңелем тағы ла нығыраҡ яралана. Ул яра ғүмерҙә лә уңалмаҫ кеүек..." Әхирәтенең был һабағы башынан сыҡмай ҡатындың. Ул эшкә барғас, секретарына телефондан бирәү менән дә тоташтырмаҫҡа, әсәһенең шылтыратыуына ғына яуап бирергә ҡуша. Бөгөнгө көндө тик әсәһенә бағышларға ҡарар итә ул..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
9 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 880